ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-1 сентябрь - октябрь (нарысай - ҡарасай)
2021
№39 (977)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Сентябрҙән - яңы ҡанундар**



2-3

**Бесән юҡ, тип...**

малдарҙы бөтөрмәйек әле



6

**Йәнебеҙ ял иткән урыныбыҙ**



8-9

**Башҡорт телен...**

1923-1933 йылдарҙа нисек уҡытҡандар?



12-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! 4 октябрҙән 14 октябргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡала-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ.***
***Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***
***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### Тарихта булмаған тәбиғәт янғындары летрәндерҙе быйыл. Ғөмүмән, нисек һаҡларға һуң тәбиғәтебеҙҙе?

***Марат ШӘРӘФЕТДИНОВ, БР урман хужалығы министры:*** Быйыл бөтөн ил, донъя күләмендәге кеүек үк, республикабыҙҙа ла сиктән тыш хәүефле янғындыр күп булды. 10 сентябргә 14,2 мең гектарҙа Бөрйән, Белорет, Хәйбулла, Күгәрсен, Йылайыр, Ейәнсура, Баймаҡ райондарында булып үткән 446 урман янғыны теркәлде. Майҙан күләме буйынса был 2010 йылғы кимәлдән күпкә артып китте. Янғын хәүефле 149 көнлөк миҙгелдең ни бары 12 көнө генә ут-ялҡынһыҙ үтте. Күрелгән зыян күләме янып юҡҡа сыҡҡан ҡиммәтле тоҡом ағастары хаҡынан сығып иҫәпләнә һәм әле ул 21 млн самаһы тәшкил итә. Вегетация осоро ахырына тиклем беҙ ошо ерҙәрҙә тикшереneүҙәр үткәргәндән һуң зыян күләме кубометрҙарҙа күрһәтеләсәк. Тәбиғи факторҙар (118 янғын осрағы - йәшен утынан, ҡояшта ҡыҙған быяла аша ҡабыныу һ.б.), ут менән һаҡһыҙ эш итеү, уттың икенсе категория ерҙәрҙән күсеп ҡабыныуы, техноген факторҙар янғындарҙың төп сәбәптәре иҫәбенә инә. Шул уҡ ваҡытта ут һүндереүҙә Федераль ярҙам сараларының етерлек кимәлдә булмауы ла эште тотҡарланы.

**Хәҙер республиканың урман хужалыҡтары һәм ҡуртымсылар алдында янған урмандарҙы тергеҙеү бурысы тора. Бының өсөн төбәктә ағас үҫентеләре үрсетеү буйынса ҙур теплица комплексы ойошторolасаҡ. Яңы ҡағиҙә буйынса урманды яңалма тергеҙеү фәҡәт үҫентеләр ярҙамында ғына башҡарыла. Бындай комплекс төҙөлөшө өсөн шәхси инвестиция йәлеп итеү ҡарала. Бынан тыш, Урман хужалығы министрлығы урмандарҙы янғындан һаҡлау буйынса ҡуртымсыларҙы ла йәлеп итәсәк. Закон нигеҙҙәре буйынса урман янғындары менән көрәшкә ҡуртымсылар ҙа үҙ өлөштәрен индерергә бурыслы.** Кем баш тарта, административ яуаплылыҡҡа тарттырыу һәм ҡуртым килешеүҙәрен юҡҡа сығарыуға тиклем саралар күреләсәк. Ҡуртымсылар урман эшен оҙаҡ ваҡытҡаса үҙ ҡулдарына алды һәм үҙ эшмәкәрлектәрен улар күп йылдар алға күҙаллап ҡорорға тейештәр. Урмандарҙы янғындан һаҡлауға сығымдарҙың утты һүндереүгә киткән сығымдарға һәм янғын килтергән зыянға ҡарағанда күпкә кәм икәнлекте аңларға тейештәр, сөнки янғын арҡаһында улар тауар ағасы күләмен юғалтыуҙан байтаҡ зыян күрәсәктәр. Тәбиғәтте, еребеҙҙең йәшел ҡалҡаны - урмандарҙы һаҡлау маҡсатында район муниципалитеттары башлыҡтарын янғындарҙы иҫкәртеү йәһәтенән урындарҙа халыҡ менән әүҙемерәк эшләргә, аңлатыу саралары алып барырға, сүп-сар, ҡоро һәм тиҙ тоҡаныусан материалдарҙы йыйыштырыуҙа контролде көсәйтергә, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтар полигондарында һәм башҡа урындарҙа сүп-сар өйөмдәрен яндырыуҙы ҡәтғи тыйырға саҡырам.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ГИМНАСТИКА ҮҘӘГЕ

**Өфөлә төҙөлә башлаған Гимнастика үҙәге 65 процентҡа әҙер. Әлеге ваҡытта бинала эске биҙәү һәм электр менән тәьмин итеү эштәре бара.**

Төҙөлөштө 2021 йылдың аҙағына тамамлау күҙаллана, тип хәбәр итте социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. "Яңы Гимнастика үҙәгендә күнекмә, гимнастика, хореография залдарын тамамлап киләбеҙ. Тамашасылар өсөн трибуналар ҙа ҡуябыҙ. Ошондай кимәлдәге үҙәк спортсыларыбыҙға бик кәрәк, бында төрлө кимәлдәге ярыштар ҙа ойошторорға йыйынабыҙ", - тине республика етәксеһе. Башҡортостанда 500-ҙән ашыу кеше - спорт гимнастикаһы, 1300-ө художестволы гимнастика менән шөғөлләнә, тип билдәләне ул. Объекттың дөйөм хаҡы - 786 миллион һум, шуның 450 миллионы - федераль бюджеттан.




12+

УЙЛЫҒА - УЙ

# ИРҘӘР НИҢӘ ҮЛӘ?



**Иртән уянғас та күптәрегеҙ ҡулына гаджетын ала һәм йоҡлаған арала булған яңылыҡтар менән таныша торғандыр. Был зарарлы ғәҙәтемде мин дә һаман тулыһынса ташлай алмайым. Төндө тыныс үткәрергә, яңы көндө иҫән-һау күрергә, ҡоштар тауышын ишетергә насип иткәне өсөн Хаҡ Тәғәләгә рәхмәт әйтеһе урынға, йыш ҡына күҙемде асҡас та телефоныма йәбешәм.**

Шулай бер көн яңылыҡтар таҫмаһында бер дуҫымдың вахтанан ҡайтҡан ирен төрлө ризыҡтар әҙерләп көткәне тураһында видео пәйҙә булды. Аш-һыуға бик оҫта ул. Унын уңғанлығына һоҡланып, табынында күгәрсен һөтө генә юҡ икән, тип уйлап та өлгөрмәнем, шул ваҡыт һыуыткыс асылып китте һәм... видеола эреле-ваҡлы шешәләрҙә төрлө спиртлы эсемлектәр күренде. Ҡош һөтө үк булмаһа ла, "һөт нигеҙендә эшләнгән" тип яҙылған сит ил һыраһы ла бар ине хатта.

"Мин шулай иремде көтәм" тип аталған пост бер-ике сәғәттә бик күп комментарий йыйғайны. Маҡтағандарға ҡарағанда һуҡраныусылар күберәк булыуы шунда уҡ иғтибарҙы йәлеп итте. Тәнҡитләүселәре лә кем бит әле - күбеһе ир-егет ине. "Йәйге эҫе көндә ошо тиклем иҫерткес эсемлек эсереп, теге донъяға оҙатырға уйланыһыҙмы?", "Үҙегеҙ эсереп өйрәтәһегеҙ ҙә, аҙаҡ зарланаһығыҙ" тигәнерәк йөкмәткеле яҙмалар ҡалдырғандарға "лайк" ҡуйыусылар ҙа байтаҡ булды. Тәнҡит күп булғас, пост, билдәле инде, оҙаҡ торманы.

Әйе, "ял итеү" тигәндә күптәр мотлаҡ эсеп байрам итеү тип аңлай. Был фекер айырыуса вахта эсулы менән эшләгәндәр араһында киң таралған.

Миҫалға тағы бер күптән түгел булған ваҡиғаны килтергем килә. Ейәнсәре тыуыуына, ҡыҙының имен-аман бушаныуына ҡыуанып, ситтә эшләп ҡайтҡан олатаһы ҡорбан салды. Ауылдың бөтә оло кешеләрен йыйып, тейешле йолаларҙы үтәп, матур мәжлес ойоштороп, теләктәр теләп, хәйер таратты. Тик хәҙрәтте оҙатыу менән табын түренә "ялтыр баш" менеп ҡунаҡланы. Ҡаршы килеүселәргә "Минең дә ял итергә хоҡуғым бар", тип яуапланы ла, яртышар йыллап сит тарафта эшләгән ғаилә башлығы һәм үҙенә шешәләгән ҡойоп, эсеп тә ебәрҙе. Уттай ҡыҙыу көндәрҙә аҙна буйы эсеп ятып, саҡ яҡты донъя менән хушлашманы. Үҙе тәҙәлә алмағас, ҡатыны "ашығыс ярҙам" саҡырҙы. Шәфәйеп ҡайтҡас, үлемдән алып ҡалдырған өсөн рәхмәт әйтәһе урынға ҡатынына ризаһыҙлыҡ белдерҙе. "Бар ғаләмгә рисуай итеп, балниска һалдығыҙ. "Алкоголизм" диагнозы менән мин эшкә бармаясаҡмын!", - тип янаған тиҙәр.

Әйткәндәй, йыл һайын республикала ошондай диагноз 2,5 мең кешегә ҡуйыла. Башстаттың һуңғы мәғлүмәттәренән шул билдәле: пандемияға тиклем, йәғни 2019 йылда иҫерткес эсемлек эсеүгә бәйле сәбәптәрҙән 700-ҙән ашыу кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. Шуның 500-ҙән күберәген ир-егеттәр тәшкил иткән. Дөйөм алғанда, үлем һаны 100 мең кешегә 18,4 осраҡ тура килә. Ә күпмеһе спиртлы эсемлек эсеүе арҡаһында үҙен төрлө ауырыуҙарға дусар итә. Бынан тыш, эскән килеш күпме ирҙәр руль артында тәҙәтеп булмаҫлыҡ хаталар эшләй, үҙен дә, янындағы кешеләрҙе лә фажиғәгә юлыҡтыра. Быйыл һыу күпме ир-егет һыуға батып үлде республикала. Уларҙың да күпселеге иҫерек булыуын иҫәпкә алһаң, бөтә бәләнең башы эскелеккә барып тоташа. Артабан да шулай дауам итһә, демографияны күтәреү өсөн бер ниндәй юғары квалификациялы медицина ла, дәүләт программалары ла ярҙам итмәйәсәк. Ә инде иҫереп, ғаиләһенә, балаларына, ата-әсәләренә килтергән әхлаҡи, физик, иктисади зыянды, күңел яраларын бер ниндәй дәүмәл һәм иҫәп менән үлсәп тә, иҫәпләп тә булмай...

Был хаҡта күпме һөйләһәк, яҙһаҡ та, күптәрҙең ҡолағына ла инмәй киҫәтеү, тәнҡитләү, кәңәш итеп әйтеүҙәр. Ә шулай ҙа...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СЕНТЯБРҘӘН - ЯҢЫ ҠАНУНДАР



### Гараж амнистияһы

2026 йылдың 1 сентябренә тиклем биш йыл буйына закон граждандарға уларҙың гараждары торған дәүләт һәм муниципаль ер участкаларын бушлай хосусилаштырыу мөмкинлеге бирә. Бында һүҙ 2004 йылдың 30 декабренә тиклем капиталь төҙөлөш объекты булараҡ һалынған гараждар хаҡында бара. Был яңылыҡ 3,5 миллиондан ашыу граждандарға ҡағыла. Гараж амнистияһы гараждарҙы һәм улар ултырған ерҙәрҙе хосусилаштырыу өсөн кәрәкле документтар һанын ғына түгел, был эшкә кешеләрҙең сығымдарын кәметергә лә мөмкинлек бирә. Росреестр мәғлүмәттәре буйынса участкаларҙы милеккә күсереүҙең уртаса кадастр хаҡы төбәктәрҙә 5-7 мең һум тора. Бынан тыш, госпошлина түләргә кәрәк. "Яңы закон буйынса граждандар объектты үҙаллы кадастр иҫәбенә ҡуйыу эшенән ҡотоласаҡ, сөнки ул урындағы үҙидара органы тарафынан ғәмәлгә ашырыла. Бынан тыш, гараж һәм ерҙе хосусилаштырғанда граждандарға госпошлина түләргә кәрәкмәйәсәк. Гараж амнистияһы менән был объект мираҫ бу-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Тарихта булмаған тәбиғәт яңғындары тетрәндерҙе быйыл. Ғөмүмән, нисек һаҡларға һуң тәбиғәтебеҙҙе?***

***Сәмбәл ҠЫУАНДЫҠОВА, хеҙмәт ветераны:*** Һуңғы йылдарҙа янғындар донъя күләмендә глобаль проблемаға әүерелде. 2020-2021 йылдар эсендә генә лә Төркиәлә, Кипрҙа, Грецияла, Австралияла, Францияның Корсика утрауында, АҠШ-тың Калифорния штатында, Ҡаҙағстанда, Украинала, шулай уҡ Рәсәй төбәктәрендә кеше ҡорбандары килтергән, тораҡ пункттарҙы юҡ иткән хәтәр янғындар булды. Бындай шарттарҙа янғын теленең урмандарға бай Башҡортостанға ла килеп етеүе ғәжәп түгел кеүек, бер уйлаһаң. Ләкин республиканың Көньяҡ Урал районды рын ялмап алған быйылғылай ут ҡаҙаһын тарих хәтерләмәйҙер ҙә, моғайын.

Бының сәбәптәрен белгестәр төрлөсә аңлата. Тәүҙәрәк янғын ут төртөүҙән башланған, тигән версия килеп сыҡып, урындағы халыҡтың бер ирҙе тотоп туҡмауы хаҡында ла хәбәрҙәр булып алды интернет селтәрҙәрендә, ләкин аҙаҡ был хаҡта башҡаса һүҙ булманы. Был хәбәрҙең дә дөрөҫ булыуы бик ихтимал, ләкин, белгестәр аңлатыуынса, ысынлап та кеше факторы тәбиғи шарттар менән берлектә янғындарҙың төп сәбәптәре булып тора. Нисек кенә булмаһын, һәр бер янғын осраҡтының сәбәптәре асыҡланыр, ғәйеплеләр табылһа, яуапҡа тарттырылыр һәм был ҙур ҡазанан тейешле һығымталар яһалыр, киләсәккә әсе һабаҡ булыр, тип ышанғы килә. Бөгөнгө көндә иң мөһиме - янғындарҙың башҡаса ҡабатланыуына юл ҡуймау, тәбиғәтте, урмандарҙы, баҫыу-ҡырҙарҙы күҙ ҡараһылай һаҡлау. Тик быға нисек өлгәшергә, ошо йәһәттән дәүләт, хөкүмәт кимәлендә ниндәй саралар күҙаллана? Иң тәүҙә шулай ҙа "батып барыусыны ҡотҡарыу - уның үҙ эше" тигәндәгесә, урындарҙа йәшәүсе халыҡтың ошо ҡазанан һуң тәбиғәтте һаҡлау бурысын төптән аңлауы кәрәк, сөнки шулай булмай икән, тотош ауылдарҙың юҡҡа сығыуы, кеше ҡорбандары хәүефе лә, күреүебеҙсә, "һә" тигәнсе.

Шөкөр, быйыл Башҡортостаныбыҙҙа бындай уҡ фажиғәгә юл ҡуйылмаһа ла, быйылғы менән көн бөтмәй, киләсәкте уйлап йәшәү, уяу һәм аңлы булыу, тәбиғәтҡә ҡарата һаҡсыллыҡты, тәртип-закондарҙы һаҡлау, уны даими күҙәтеү кәрәк. Ҡайҙа етте, шунда сүп-сар түгеүҙе, ҡырҙа, урманда, бесәнлектәрҙә усаҡ яғыуҙы ҡәтғи тыйырға, был йәһәттән тотолған ғәйеплеләргә ҡарата тейешле административ, енәйәт яуаплылығы ҡулланыуҙан тартынырға ярамай. Шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙә балалар араһында аңлатыу эштәре алып барыу, тик быны өгөт-нәсихәт рәүешендә ялҡытҡыс ҡабатлап түгел, ә Янғын һағы, МЧС хеҙмәттәренән яуаплы кешеләр саҡырып, балаларҙы ҡотҡарыусы, янғын һүндереүсе, тәүге ярҙам күрһәтеүсе ролендә уҡыу-өйрәтеү уйындары аша мауыҡтырғыс һәм файҙалы итеп ойоштороrға кәрәктер, тип уйлайым.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнән Көнсығышҡа сығыу юлы федераль әһәмиәттәге М-5 "Урал" трассаһына автомобиль юлын һалыу барышы менән танышты. "Башҡортостан концессия компанияһы" йәмғиәтенең генераль директоры Асабали Закавов һүҙҙәренсә, Федоровка - Шакша юлы киҫелешендә автомобиль юл үткәргесен һәм "Көнсығышҡа сығыу юлын" төҙөү барышында дөйөм ҡулланылыштағы ваҡытлыса урау юл һалыу тамамланды. Төҙөлөш тамамланғас, Федоровка - Шакша автомобиль юлы Көнсығышҡа сығыу юлы өҫтөнән дүрт һыҙатлы күпер булып үтергә тейеш.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Башҡортостан Республикаһы Башлығының республикала ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе вазифаһы булдырылды. Вәкил вазифаһына 21 йәштән өлкән, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән, юғары белемле, ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау өлкәһендә 12 айҙан күберәк эш тәжрибәһенә эйә булған Рәсәй гражданины тәғәйенләнә. Положениеға ярашлы, кәңәшсе вазифала йәмәғәт башланғысында эшләй. Дәғүәселәрҙе был вазифаға республика етәксеһе тәғәйенләй.

✓Башҡортостанда 12 районның ҡайһы бер мәктәптәрендә дистанцион уҡытыу ойоштороला. Республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 22-23 сентябрҙән Әбйәлил, Балтас, Бәләбәй, Белорет, Бишбүләк, Бүздәк, Бөрйән, Ғафури, Шишмә, Мишкә, Стәрлебаш, Янауыл райондарының 5-се, 6-сы, 7-се, 8-се, 10-сы класс уҡыусылары 14 көнгә дистанцион уҡыуға күсерелә. Балаларҙың льготалы категорияһына дистанцион уҡыу осоронда аҙыҡ-түлек йыйылмаһын таратыу ойоштороला, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығынан.

✓Оператив штабтың 24 сентябргә мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда коронавирустан 19 үлем осрағы теркәлгән. Йәмғеһе 1496 сирленең ғүмере өҙөлгән. Бер тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 355 осрағы асыҡланған. Бөтә осорҙа уларҙың һаны 64 551-гә еткән. Әлеге ваҡытта 693 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 473 кеше стационарҙа дауалана. Уларҙың 49-ының хәле ауыр, 11-е үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Бер тәүлектә 171 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓ ***Бина һәм торлаҡ йорттар стенаһында, уларҙың ҡыйыҡтарында тауыш ҡорамалдары файҙаланылған рекламаны сикләгән федераль закон үҙ көсөнә инде.***



лараҡ тейгән вариҫтар ҙа, элекке хужаларҙан һатып алыусылар ҙа файҙалана ала. Граждандар гараждың һәм уның ерен хосуси милеккә бер ғариза буйынса ғына аласаҡ", - ти был хаҡта РФ Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишһарин. Депутат аңлатма биреүенсә, урындағы хакимиәткә ғариза менән бергә бирелергә тейешле документтар исемлеге төбәктәр ҡарамағы буйынса өҫтәлеүе лә бар. Был, мәҫәлән, гаражды инженер-техник тәьминәткә тоташтырыу буйынса килешеү, башҡарылған коммуналь түләүҙәрҙе раҫлаусы документтар, гараж һәм ер участкаһы бүлеү тураһында кооперативтың дөйөм йыйылышы ҡарары.

## Штрафҡа дәғүә белдереү

1 сентябрҙән автомобилселәр автоматик юл камералары теркәгән административ хоҡуҡ боҙоуҙар өсөн ҡарарға дәғүәне Дәүләт хеҙмәте порталы йәки суд сайты аша бирергә мөмкин. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, әгәр дәүләт хеҙмәттәре менән файҙаланыусы ниндәй йомош менән булыуға ҡарамаҫтан, шәхси кабинетына инә икән, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу хаҡындағы электрон хәбәр адресатҡа еткерелгән тип иҫәпләнә. Ошо мәлдән алып 10 көн буйына порталда штрафҡа ҡарата дәғүә белдерергә була. Әле штрафҡа дәғүә белдереү өсөн ЮХХДИ-ның тейешле подразделениеһына ғариза бирергә кәрәк.

## Тәмәкене ташлайым, тиһәң...

1 сентябрҙән тәмәке тартыуҙы ташларға теләүселәр медицина ярҙамына мөрәжәғәт итә ала. Рәсәйҙәргә хәҙер медицина-санитар һәм терапевт, пульмонолог, кардиолог, психиатр һәм психотерапевт кеүек дөйөм ғәмәли табиптарҙан тәүге ярҙам алырға мөмкин. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғона ярашлы, тәмәкегә бәйлелеге асыҡланған пациенттар тәүге медицина ярҙамы алыу өсөн Тәмәкенән баш тартыу кабинетына ебәреләсәк. Элек был-дай кабинеттар күп кенә ҡалаларҙа һаулыҡ үҙәге базаларында асылғайны, ә инде былдай үҙәктәр булмаған урындарҙа пациент дөйөм ғәмәли табипҡа йәки терапевҡа ебәрелә ине. Быларҙан бер ниндәй һөҙөмтәләр булмаған сүрәттә пациентты беренсел махсуслаштырылған медицина-санитар ярҙам күрһәтеү маҡсатында "психиатрия-наркология" йүнәлешле медицина ойошмаларына ебәрәсәктәр.

## Бала тәрбиәләгәндә ауырыһаң...

1 сентябрҙән мәктәпкәсә йәштәге балалары ауырып киткән осраҡта уларҙы ҡараған ата-әсәләр больничный өсөн түләүҙе 100 процент аласаҡ. Депутаттарҙың был инициативаны ил Президенты Мөрәжәғәтнамәһендә хуплана.

Хеҙмәткәрҙең стажына ҡарамай, 7 йәшкә тиклем бала тәрбиәләгәндәрҙең барыһына ла 100 процент түләнәсәк. Дәүләт Думаһындағы "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы етәксеһенең беренсе урынбаҫары Андрей Исаев был ғаиләнең финанс имеңлеген тәьмин итергә булышлыҡ итәсәк, тине. Быға тиклем 5 йыл стажы булғандарға эш хаҡының - 60, 5-7 йыл булһа - 80, 8-20 йыл булһа 100 процент түләнә ине. "Больничный өсөн түләүҙе 100 процент күләмендә алыу ата-әсәләр, өләсәйҙәр, балалар, хатта балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, уҡытыусылар өсөн дә бик уңайлы буласаҡ. Иң мөһиме, был ҡыҙ һәм малайҙарҙың сәләмәтлегендә сағыласаҡ, улар өй шарттарында дауалана аласаҡ. Уларҙың ата-әсәләре эш хаҡын юғалтмаҫ өсөн тиҙерәк эшкә сығырға ашыҡмаясаҡ. Уларҙы тәьмин итеү мәсьәләһен дәүләт үҙ өҫтөнә алды", - тине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай вице-спикеры Эльвира Айытколова.

Больничный мәсьәләһе илдең бөтә төбәктәрендә лә бар ине. Ата-әсәләр хәлде үҙгәртеүҙе һорап, "Рәсәйҙең әсәйҙәр советы"на ла мөрәжәғәт итте. Шуға бәйле совет был ғәҙелһеҙлекте бөтөрөргә булышлыҡ иткән тейешле закон булдырыуҙы һораны. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты 21 апрелдә Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә балалы ғаиләләргә ярҙам саралары тәҡдим итеп, социаль өлкәгә ҙур иғтибар бирҙе. Ауырып киткән 7 йәшкә тиклемгә балаларын ҡараған ата-әсәләргә больничный аҡсаһын 100 процент түләү тураһында инициативаны ла хупланы.

## Шаулама!

Бина һәм торлаҡ йорттар стенаһында, уларҙың ҡыйыҡтарында тауыш ҡорамалдары файҙаланылған рекламаны сикләгән федераль закон үҙ көсөнә инде. Шул уҡ ваҡытта тыйыу баҙарҙарҙа, кеше күпләп йыйылған урындарҙа күсмә колонкаларҙан бирелгән рекламаға ҡағылмай. Закон сығарыусылар быны һатыусылар һәм реклама биреүселәрҙең хоҡуғын боҙоу тип иҫәпләй.

"Реклама тураһында" закон ҡабул ителгәндә тауыш рекламаһын бөтөнләй тыйыу хаҡында уйланыҡ. Был тәңгәлдә төрлө фекер булды, шулай ҙа уны тулыһынса тыймаҫҡа ҡарар иттек. Әммә бина фасадтарында, ҡыйыҡтарҙа урынлаштырыуҙы тыйыу мөһим, тип иҫәпләйем. Кире реакция уятҡан, тыныс ял итергә бирмәгән тауыштан ҡотолорға кәрәк", - ти Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаев.

"Мәэстро" йәмғиәте директоры Максим Лушин был законға ҡарата үҙ фекерен белдерҙе: "Тауыш рекламаһын тулыһынса тыйыуға ҡаршымын, әммә уны көйләү яҡлымын. Урам радиоһы тәү сиратта граждандар оборонаһы йүнәлешендә хәбәр итеү, халыҡты ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән, янғын хәүефенән һаҡлау өсөн булдырылған. Иғлан итеү системалары ярҙамында ғәҙәттән тыш хәлдәр, тәбиғәт ғәрәсәттәре, терроризмды иҫкәртеү сараларын үткәреү тураһында мәғлүмәт бирелә. Берҙәм дежур-диспетчер һәм Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәттәре һауа торошо үҙгәреүе, һыу инеүҙе сикләү, янғын хәүефле осор тураһында мәғлүмәт биреүҙә урам радиоһын ҡуллана. ЮХХДИ йәйәүлеләр ҡатнашлығындағы юл транспорты ваҡиғаларын кәметеүгә йүнәлтелгән аудиороликтар урынлаштыра. Полиция юғалған балаларҙы, граждандарҙы эҙләй, мутлашыусыларҙан, терроризмдан, кеҫә ҡараҡтарынан һаҡланыу кәрәклеге тураһында иҫкәртә".

## Онлайн дарыу

Дарыуҙарҙы онлайн тәртиптә һата алған аптека ойошмаларына талаптар үҙгәрә. Хәҙер селтәрҙә булмаған дарыуханаларға дистанцион сауҙа рөхсәт ителәсәк, ә һатып алыусылар препараттарҙы маркетплейстарҙа аласаҡ. Элегерәк ойошманың Рәсәй территорияһында кәмендә 10 дарыуханаһы һәм үҙенең сайты булырға тейеш ине, хәҙер иһә ойошмалар агрегаторҙар хужалары менән килешеү төҙөй һәм уларҙа урынлаша ала.

## Урман питомниктары

Урман питомниктары булдырыу һәм уларҙы файҙаланыу тәртиптәре нығытылды. Былдай ер һәм урман участкаларында тейешле инфраструктура булдырыу мотлаҡ. Унда төп урман ағастары тоҡомдары үҫентеләре һәм орлоҡтары үҫтереләсәк.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Тарихта булмаған тәбиғәт яңғындары тетрәндерҙе быйыл. Ғөмүмән, нисек һаҡларға һуң тәбиғәтебеҙҙе?*

***Азамат РӘХИМҒОЛОВ, Ейәнсура районы Биштирәк ауылы:*** Эйе, быйылғы янғындар тарихта ҡалырлыҡ ғибрәтле хәл булды. Уның һөҙөмтәләре бөтәбеҙгә лә, бигерәк тә килер быуындарға әсе һабаҡ булыр, моғайын. Ошо һабаҡ бөгөндән алып беҙҙең үҙебеҙгә лә иҫкәртеү булһын ине: урмандарыбыҙ, аҡлан-туғайҙарыбыҙ, иген-бесән үҫер баҫыуҙарыбыҙҙың ҡәҙерен белеп, һаҡсыллыҡҡа өйрәтһә ине. Тәүҙәрәк был ҡаза ил буйынса - Хакасия, Марий-эл, Яҡутстан, Себер төбәктәре, Алыҫ Көнсығышта - ҡайҙалыр беҙҙән алыҫта барған кеүек булһа ла, уттың ялыҡойроғо юҡ, тип халыҡ бик дөрөҫ әйткән, тиҙ арала был янғындар беҙҙең төбәкте лә ялмап алды. Һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ул беҙҙе бер ниндәй әҙерлекһеҙ хәлебеҙҙә килеп баҫты. Утҡа ҡаршы берҙән-бер сара - халыҡтың берҙәмлеге булды, тип әйтә алам, сөнки был хәбәрҙе ишетеү менән Башҡортостандың төрлө райондарынан - хатта алыҫта ятҡан Дүртөйлө, Салауат, Учалы яҡтарынан, шулай уҡ ут күрше Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районынан саҡырмайынса ла ут һүндерешергә тип ирекмәндәр, ир-егеттәр, хатта ҡатын-ҡыҙҙар килеп етте.

Тик шуныһы: кешеләр бар, ә янғын һүндереү өсөн ҡорамал юҡ. Көрәк, балта, лом менән генә булмай бит. Һыу ташыусы ун ҡорамалы ут һүндергестәр бик аҙ, бөтәһенә лә етмәй. Ә шулай ҙа халыҡ аптырап торманы: япраҡлыраҡ ялбыр ағас ботаҡтары менән һуғып, утты һүндерергә кереште. Һөйләүе генә хәҙер еңел һымаҡ, ниндәй шарттарҙа ут менән көрәшергә һәм үҙҙәрен хәүеф-хәтәр аҫтына ҡуйырға тура килеүе хаҡында һүндереүселәр үҙҙәре генә белә. Төтөн күҙҙәрҙе әсеттерә, ялҡын ипкене бит-ҡулдарҙы өтә, аяҡ кейемдәренең табандары янып бөттө...

Иҡе көн буйы Хәйбулла яғында утты һүндерҙек, унан ут күҙ асып йомғансы беҙҙең район биләмәһенә күсте һәм, ел көслө булыу сәбәпле, беҙҙең Биштирәккә үрмәләне, хәүефле хәл килеп тыуҙы: ауылыбыҙҙа ут ҡабыу ҡурҡынысы янай ине. Ирекмәндәрҙән бер төркөм ауылды ҡамап, янғын ҡаршыларға әҙер торҙо. МЧС-тан килеп, кәңәштәр биреп, инструктаж үткәреп киттеләр. Күгәрсен районы Тәүәкән ауылынан машина ебәрҙеләр. Бәхеткә, дөйөм көс менән утты сигендерә алдыҡ: Иҙелбәктән һыу ташыусы УАЗ машинаһы, Башҡортостан "Сода" берекмәһенән ҡеүәтле бульдозер килеп етте, ул тау-таш, урманлыҡ тип ҡарап тормай, тиҙ арала тирә-яҡты аҡтарып һөрөп сыҡты. Баш ҡазаһы, шөкөр, булманы, ләкин ауыл кешеләренең сабынлығы, әҙерләгән бесәне янып юҡҡа сыҡты.

Бәлә-ҡаза килгәндә халҡыбыҙ элек-электән берҙәм һәм ойошҡан булған, шул сифаттарҙың бөгөн дә һаҡланып ҡалыуы беҙҙе ҙур бәләнән ҡотҡарып, ут тырнағынан йолоп ҡалды. Ләкин киләсәктә былдай хәлдәргә барыбер әҙерлекле булыу кәрәк икәненә үҙ елкәбеҙҙә татып инандыҡ. Исмаһам, янғын һүндереү өсөн ябай ғына ҡорал-ҡулайламалар эшләп, инструменттар йүнләп ҡуйыу кәрәк. Ҡабат булмаһын ундай ҡазалар, ә бит башҡа төбәктәрҙә, әйтәйек, әлеге Хакасия, Яҡутстан, Ҡурған яҡтарында тотош ауылдары янып китте, былна шул хәл бик ауыр. Тәбиғәтебеҙҙе һаҡларға өйрәнәйек, ниһайәт. Ҡырҙа, бесәнлектәрҙә, ел көслө мәлдәрҙә ауылда мунса яғыуҙан ҡәтғи тыйылыу кәрәк. Бигерәк тә балаларҙың ут менән шаярыуына сик ҡуйыҡ. Мәктәптәрҙә ОБЖ дәрестәрендә уларға уттан сығыусы һәләкәт ихтималлығы хаҡында һөйләһендәр, янғын осраҡтарында үҙҙәрен нисек тоторға өйрәтһендәр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда коронавирусҡа ҡаршы һөҙөмтәле көрәшеү өсөн 2,48 миллион кешегә прививка яһарға кәрәк. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, республиканың көньяғында һәм көнбайышында, шулай уҡ Урал аръяғында ҡайһы бер муниципалитеттар коронавирусҡа ҡаршы уртаса вакцинация темптарынан ҡалыша. Вакцинация темпы буйынса Башҡортостан бөгөн Рәсәйҙә 15-се урынды биләй, вакцинаны файҙаланыу темпы буйынса иһә 24-се урында тора.

✓Башҡортостанда яңы уҡыу йылының тәүге көндәрендә COVID-19 йоҡторған уҡытыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың бер аҙ артыуы күҙәтелә. Республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин билдәләүенсә, мәктәптәрҙә тейешле санитар-эпидемиологик талаптар үтәлә. Термометрия үткәрелә. Уҡытыусыларҙың битлек режимы һаҡлана. Мәктәптәрҙә БДМУ һәм медицина колледждары студенттарынан 1268 медицина инспекторы эшләй. Шулай уҡ 2 244 уҡытыусы медицина инспекторы сифатында эшкә тотондо. Мәктәп уҡытыусыларының 84 процентҡа яҡыны коронавирусҡа ҡаршы прививка эшләткән.

✓2022 йылда страховка пенсиялары 5,9 процентҡа арттырыла. Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Антон Котяков һүҙҙәренсә, эшләмәгән пенсионерҙың ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса йыллыҡ күләме 2022 йылда - 18 521 һум, 2023 йылда - 19 477 һум, 2024 йылда 20 469 һум була. Ҡартлыҡ буйынса страховка пенсиялары йыл һайын 1 ғинуарҙа индексацияланә. 2021 йылда ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияларының уртаса күләме 16 789 һум тәшкил итә, быйыл уларҙы 6,3 процентҡа арттырҙылар.

✓"Атайсал" проекты Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың башланғысы менән яҡташтарҙың тыуған төйәктәренә ярҙам программаһы буларак барлыҡҡа килде. Яҡташтарҙың тыуған ауылдарына ярҙам итеүе хаҡында миҫалдар бихисап: кемдер аҡса менән, кемдер фельдшер-акушерлыҡ пунктын ремонтлай, кемдер балалар майҙансыҡтары төҙөй йәки шишмәне төҙөкләндерә. "Атайсал" проектында сайт аша ҡатнашырға, ошонда уҡ муниципалитет халҡына ҡыҙыҡлы булырҙай проект тәҡдим итергә мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# БЕҘ ХОККЕЙ ЯРАТАБЫҘ!

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Континенталь хоккей лигаһы миҙгеле башланыр алдынан "Салауат Юлаев" хоккей клубы менән осрашҡайны.** Республика етәксеһе был миҙгелдең команда өсөн юбилейлы булыуын иҫкә төшөрҙө. Клуб ойошторолоуға - 60, беренсе Гагарин кубогын алыуға 10 йыл тула. "Беҙҙә хоккей бик популяр, ҡайҙа ғына барһам да, боҙ һарайҙарын төҙөүҙе һорайҙар", - тине Радий Хәбиров. - Быйыл Ишембайҙа боҙ аренаһын астыҡ. Киләһе йылда Октябрьскийҙағы төҙөлөштө тамамлайбыҙ. Хәҙер Баймаҡта Боҙ һарайын проектлайбыҙ һәм Янаулда проект алды эштәрен башлайбыҙ". Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, быйыл "Салауат Юлаев"тың иҡтисади проблемалары булмаясаҡ. Республика етәкселеге бер нисә компания менән һөйләшеүҙәр үткәрҙе. "Команданы үҙенең кәйефе һәм әҙерлек кимәле генә борсорға тейеш, ҡалғанын беҙ хәстәрләрбеҙ. Гагарин кубогын көтәбеҙ, уның өсөн көрәшәсәкбеҙ!" - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров

✓ **Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков 23 сентябрҙә яңы йылытыу миҙгелен башлау тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. 25 сентябрҙән күп фатирлы йорттарға йылы бирә башлайҙар, тип хәбәр ителә мэрия сайтында.** Ҡарарҙа йылылыҡ энергияһы менән тәьмин иткән предприятие етәкселәренә ҡулланыусыларға уларҙың ғаризаларына ярашлы йылы биреү бурысы йөкмәтелгән. Йорттарға йылыны ваҡытында биреү Өфө хакимиәте бүлектәре етәкселәре, баш ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтары контролендә тотола. "Дүшәмбенән көндәр һыуына. Мин дә, беҙҙең бөтә команда ла бөгөндән йылылыҡ менән тәьмин итә башларға, тигән ҡарар ҡабул иттек. Билдәле, ҡайҙалыр ниндәйҙер ҡатмарлыҡтар килеп тыуыуы бар. Әммә дүшәмбегә барлыҡ йорттарҙа ла йылы буласаҡ", - тине мэр Сергей Греков. Барлыҡ һорауҙар менән 277-09-11 номеры буйынса йылытыу миҙгелендә эшләү буйынса ҡала штабының колл-үҙәгенә шылтыратырға мөмкин. Шулай уҡ халыҡ үҙенең идарасы компанияһына, торлаҡ милекселәре ширҡәтенә, ресурстар менән тәьмин итеү ойошмаларына мөрәжәғәт итә ала.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Мәғариф министрлығына һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарына Пермдәге фажиғәнең хәл-шарттарына төшөнөргә һәм уҡыусыларҙың, студенттарҙың хәүефһеҙлеге буйынса тейешле саралар күрергә ҡушты.** Хәбәр ителеүенсә, 20 сентябрҙә Тимур исемле егет атыу ҡоралы менән Пермь дәүләт университеты биләмәһенә үтеп инеп, атыш ойошторған. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, биш кеше үлгән, алтауһы яраланған. Юғары уҡыу йортоноң матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, яраланған енәйәтсе әле дауаханала. Билдәле булыуынса, ул енәйәт ҡылырға бер нисә минут ҡалғас социаль селтәргә экстремист түгеллеге һәм сәйәси эшмәкәрлеккә вайымһыҙлығы тураһында яҙма һалған.

✓ **2019 йылдан алып беҙ йылылыҡ өсөн бары тик йылытыу миҙгелендә ҡулланылған күләм буйынса түләйбеҙ, шуға күрә йәйгеһен был түләүҙәр квитанцияға индерелмәй, әммә тиҙҙән һыуыҡтар башлана, ҡыш етә һәм түләүҙәр суммаһы һиҙелерлек артыуы мөмкин.** УИС МУП-ы халыҡҡа әле үк алда торған коммуналь түләүҙәрҙе иҫәпкә алып, сығымдарын планлаштырырға: квитанцияларҙа ҡабат "Йылылыҡ" графаһы менән бергә көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә финанс көсөргәнеше барлыҡҡа килмәһен өсөн ресурстар менән тәьмин итеү ойошмаһы фатир хужаларына сентябрҙән үк аванс индерә башларға тәҡдим итә. Быны үҙегеҙгә уңайлы ысул менән башҡарырға мөмкин. Индерелгән аванс иҫәбенә артыҡ түләү барлыҡҡа килә һәм ул йылытыу миҙгелендәге көсөргәнеште бер аҙ кәметеүе ихтимал.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАЙЛАУ ЙОМҒАҠТАРЫМЫ?




**Рәсәйҙә уҙған аҙнаның йома-йәкшәмбе көндәрендә төрлө кимәлдәге һайлауҙар булып үтте. Дөйөм Рәсәй буйынса РФ Дәүләт Думаһының яңы составы һайланһа, Башҡортостанда БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һәм айырым муниципалитеттарҙа (Өфө, Белорет, Бөрө, Өфө районы һәм Йоматау ауыл советы) район һәм ауыл советтарына өҫтәмә һайлауҙар үтте, Өфө ҡала Советына яңы состав һайланды.**

Республикала һайлауҙа 2 миллион 75 мең кеше ҡатнашҡан, йәғни барлыҡ һайлаусыларҙың 72,79 проценты үҙенең граждандыҡ бурысын үтәгән. Баш ҡалала һайлаусыларҙың әүҙемлеге 37,6 процент тәшкил итһә, республика ҡалалары буйынса ул 57,7 процент, шул уҡ ваҡытта Салауат һәм Сибай ҡалаларында был күрһәткес 75 һәм 71,4 процент тәшкил итә. Ауыл райондары буйынса ҡарағанда уртаса әүҙемлек 78 процент, Салауат (96 процент), Шаран (95 процент) һәм Тәтешле (92 процент) райондарында иң әүҙем һайлаусылар йәшәй.

Һәр ваҡыттағыса, "Берҙәм Рәсәй" партияһы алдынғылыҡты бирмәй, ҙур айырма менән булһа ла коммунистар ҙа ҡалышмай. Өсөнсө урында - ЛДПР. Шулай уҡ талап ителгән биш процент барьерын үткән "Ғәҙел Рәсәй" һәм яңы барлыҡҡа килгән "Яңы кешеләр" партияһы ла Думаға эләгә. Мәғлүм булыуынса, Дәүләт Думаһы бер нисә саҡырылыш дүрт партиялы ғына була һәм "Яңы кешеләр"ҙең унда эләгеүен сенсация тип ҡарарға мөмкин, тип белдерә РФ Үҙәк һайлау комиссияһы.

Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко белдереүенсә, һайлау көндәрендә барлығы 224 мөрәжәғәт килгән. Кәрәкле һайлау участкаһын табыу, КОИБ-тарҙың эше, бюллетендәрҙе сейф-пакеттарҙа һаҡлау буйынса һорауҙарҙан тыш, "Ғәҙел Рәсәй" партияһының кәңәш биреү тауышы булған участка һайлау ағзаларын комиссия эшенә индермәүҙәре буйынса ялыуҙар күп булған. Интернет селтәрен шаулатҡан Бөрйән районының 1660-сы һайлау участкаһындағы хәл-ваҡиға тикшерелеп, унда шул көндә КОИБ аша тауыш бирелгән бюллетендәр ғәмәлгә яраҡһыҙ тип табыла. "Ғәҙел Рәсәй" партияһынан күҙәтеүселәр Нефтекама ҡалаһының 482-се участкаһында бюллетендәрҙе күпләп ташлау тураһында ғариза менән мөрәжәғәт итә. Был мәсьәлә судта ҡарала һәм суд һайлау комиссияһы ғәмәлендә тәртип боҙоу тапмай. Шулай уҡ башҡа ялыуҙар ҙа тикшерелә.

Журналистарҙы һәм республиканың сәйәси тормошон күҙәтеп барған халыҡты ҡыҙыҡһындырған: "Ә Хәбиров үҙе һәм уның Хакимиәте башлығы Алесандр Сидякин Думаға китерме?" - тигән һорауға ла асыҡлыҡ индерелде: Радий Хәбиров та, Александр Сидякин да Башҡортостанда ҡаласаҡ, йәғни улар Думалағы үҙ урынын партия исемлегендәге икенсе кешеләргә бирәсәк.

Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өс округта депутаттар һайланды. Буй һайлау округында Милана Скоробогатова, Краснохолмск һайлау округында - Тамара Таныҡҡужина, Толбазы һайлау округында - Заһир Хәкимов республика парламенты депутаты мандатын алыу хоҡуғына эйә булды.

# АУЫЛДАРҒА ҠАЙТЫҒЫҘ!

**Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында ауыл еренә эшкә ҡайтҡан мәҙәниәт өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә компенсация түләү саралары хупланды.**

"Майҙа "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһының башланыуын иғлан итте. Бындай программа федераль кимәлдә әҙерләнә генә, Рәсәй төбәктәрендә уның аналогтары юҡ. Шуға күрә кадрҙарҙы ауылға йәлеп итеү өсөн ауыл еренә эшкә ҡайтҡан хеҙмәткәрҙәргә компенсация түләү тураһында ҡарар ҡабул иттек. Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарын тамамлаған йәштәрҙе ауылға әүҙемерәк йәлеп итергә кәрәк", - тип билдәләне Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров.

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һүҙҙәренсә, мәҙәниәт өлкәһендә белгестәргә ихтыяж - 360 кешенән ашыу. Тәү сиратта ауыл клубтарында һәм балалар сәнғәт мәктәптәрендә кадрҙарға ҡытлыҡ күҙәтелә. Тармаҡта эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең өстән бер өлөшө - пенсия йәшендә.

"Муниципаль мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамы саралары 2021 йылда һәр кемгә торлаҡ йәки ер участкаһы һатып алыу өсөн 500 мең һум күләмендә бер тапҡыр түләнә торған компенсация рәүешендә субсидия биреүҙе күҙ уңында тота, - тине министр. - Ярҙам мәҙәниәт өлкәһендә һөнәри белемгә эйә булған 35 йәшкә тиклемге белгестәргә күрһәтелә. Улар - 2018 йылдан ауылға йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаға эшкә килгән мәҙәни-ял учреждениелары, китапханалар, музейҙар, мәҙәниәт өлкәһендә өҫтәмә белем бирген уҡытыусылар".

# КОНТРОЛЬ КӨСӘЙӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле тәртип урынлаштырырға ҡушҡандан һуң, республиканың Урал аръяғында ер аҫтын файҙаланыусыларҙың эшенә контролде көсәйтеү өсөн республиканың Экология министрлығы өҫтәмә офистар асты. Учалыла (К.Маркс урамы, 1) һәм Сибайҙа (Ленин урамы, 38) республика Экология министрлығының территориаль бүлексәләре барлыҡҡа килде.**

"Штатты дүрт кешегә арттырып, Экология министрлығының территориаль бүлексәләрен көсәйттек. Ике инспектор - Учалыла, икеһе Сибайҙа эшләй. Улар карьерҙар, ер аҫтын файҙаланыусылар менән генә шөғөлләнә. Республика Экология министрлығының яңы хеҙмәткәрҙәренә йөкмәтелгән өсөнсө бурыс - инспектор тикшереүҙәре үткәреү, карьерҙарҙы контролдә тотоу. Шул рәүешле беҙ һәр карьерға барып етербеҙ, республика етәксеһенең йөкләмәһе үтәлер. Тармаҡта тәртип урынлаштырырбыҙ", - тине республика Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов. Уның һүҙҙәренсә, Экология министрлығының яңы хеҙмәткәрҙәренә легаль һәм легаль булмаған барлыҡ карьерҙарҙың реестрын төҙөү, урындағы халыҡ менән эшләүҙе лә йәйға һалыу бурыстары йөкмәтелгән. Рөхсәтһеҙ эш алып барылған карьер, биләмәлә башҡа закон боҙоу осраҡтары тураһында Башҡортостан Экология министрлығының территориаль бүлексәләре хеҙмәткәрҙәренә хәбәр итергә мөмкин: Учалыла: баш белгес-эксперт Илсаф Ғәбдиев, телефон 8-927-309-64-48 һәм баш белгес-эксперт Гөлсөм Исламғолова, телефон 8-960-388-25-71. Сибайҙағы бүлексәне Баймаҡ районы хеҙмәтләндерә. Ошо биләмәләге закон боҙоуҙар тураһында баш белгес-эксперт Салауат Баҡтыбаевҡа (8(34775) 2-86-02) йәки баш белгес-эксперт Айҙар Тутаевҡа (8(34775) 2-86-02) хәбәр итергә була.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Спорт министрлығы яңы коронавирус инфекцияһына бәйле тамашасыларҙың ябыҡ биналарҙа спорт сараларында ҡатнашыуына 1 ноябргә тиклем сикләү индерҙе. Белдереүҙәренсә, хоккей, футбол һәм волейбол матчтарында тамашасылар һанын сикләү тураһында мәсьәлә айырым өйрәнелә. Ведомство вәкилдәре "Өфө-Арена"ла, BetBoom Аренала һәм "Динамо" стадионында "мөмкин тиклем ҡаты санитар-эпидемиологик талаптар" ҡабул ителәсәген билдәләне.

✓Алдағы көндәрҙә Өфө маршруттарына ҙур һәм урта класлы 220 яңы автобус сыға. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы Vector NEXT һәм "НЕФАЗ" моделдәренең үҙенсәлектәре менән танышты. Элекке моделдәр кеүек үк, яңы автобустар пассажирҙарға мәғлүмәт еткереүҙең электрон системаһы (автоинформатор һәм табло), ГЛОНАСС системаһы, тахограф һәм аппарель менән йыһазландырылған, уларҙа инвалид коляскаһы өсөн махсус урын ҡаралған. Һатып алынған моделдәрҙең төп айырмаһы - видеокүҙәтеү системаһы.

✓Өфөлә 20-21 сентябрҙә умартасыларҙың Халыҡ-ара онлайн-симпозиумы ойошторолдо. Симпозиумда Башҡортостан, Рәсәй һәм сит ил вәкилдәре ҡатнашты. Улар - бал ҡорттары генетикаһы, сәләмәтлеге, умартасылыҡ иҡтисады өлкәһендә эшләгән ғалимдар, умартасылар. Халыҡ-ара онлайн симпозиум төп ваҡиғаға - 2022 йылдың сентябрь башында Өфөлә уҙасаҡ "Апимондия"ның 47-се конгресына булышлыҡ иткән сара булып тора.

✓27 сентябрҙән "Орлан" тиҙлекле электр поезы "Өфө - Ырымбур" маршруты буйынса хәрәкәт итә башланы. Ул Башҡортостандың баш ҡалаһын Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез, Күмертау һәм Ырымбур ҡалалары менән тоташтыра. Ике төбәктең административ үҙәктәре араһында юл оҙайлығы 6 сәғәт, айырым урындарҙа "Орлан" сәғәтенә 100 километрға тиклем тиҙлек менән йөрөй.

✓Бөгөн Өфө халҡы #Сделаем2021 Бөтә донъя таҙалыҡ көнөнә ҡушылып, тирә-яҡты санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса дөйөм ҡала шәмбе өмәһенә сыҡты. Уның сиктәрендә сүп-сарға ҡаршы киң масштаблы экологик саралар ойошторолдо. Төп иғтибар тәбиғәтте: урман, һыу яткылыҡтары ярҙарын һ.б. таҙартыуға йүнәлтелде. Бынан тыш, "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы ла уҙҙы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Ленин паркын реконструкциялау буйынса халыҡтың фекере айырымланған. Уларҙың бәғзеләре был паркты исемлектән алып ташларға, икенселәр Ленин паркын түгел, ә бөтөнләй емерек хәлдә булғандарын төҙөкләндерергә кәрәк, ти.



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# АЛДА - ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

**Мәғлүм булыуынса, баш ҡалала йылылыҡ менән тәьмин итеү, ҡар таҙартыу һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ вәкәләтенә ингән башҡа мәсьәләләрҙе тикшереү буйынса оператив штаб төҙөлдө һәм ул 22 сентябрҙә эшләй башланы.**

Көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә көнүҙәк булған мәсьәләләрҙең нисек хәл ителәсәге тураһында ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Марат Ғәйфуллин сираттағы оператив кәңәшмәлә таныштырҙы. Сығыш яһаусы белдереүенсә, 19 сентябрҙән фатирҙарҙа йылылыҡ бирелә башлаған. 21 сентябргә ҡарата ул 400 йортто тәшкил итә, сөнки уларға йылылыҡ бирмәй тороп, барлыҡ социаль объекттарҙы йылылыҡ менән тәьмин итеп булмай - барыһы бергә тоташтырылған, ә айырым түгел.

Барлыҡ йорттарҙы ла йылылыҡҡа тоташтырыу өсөн 5 тәүлек рәттән һауа температураһы +8 тороҡға тейеш. 18 сентябрҙән шундай һауа температураһы күҙәтелһә лә, алдағы көндәрҙә йылы булыуы көтөлә һәм шуға күрә тотош ҡалаға йылылыҡ биреү артабанғы һауа торошона ҡарап хәл ителәсәк. Әммә өйҙәр шунда уҡ йылынасаҡ тип өмөтләнергә ярамай, сөнки йылылыҡ бирелгәндән һуң йорттарҙағы йылытыу ҡоралмалары йылынғанға тиклем 3 тәүлек самаһы ваҡыт үтеүе мөмкин.

Капиталь төҙөлөш идаралығы начальнигы Эдуард Нагаев Ағиҙел аръяғы территорияһындағы инженер селтәрҙәре һәм объекттар төҙөлөшө барышы менән таныштырҙы. Быйыл унда дөйөм суммаһы 8 миллиард һум тәшкил иткән һыу менән тәьмин итеү объекттары төҙөлә башлаған. Эштең беренсе этабында Киров һәм Дим районарында дөйөм оҙонлоғо 23 километр булған торбалар һалына. Әлеге ваҡытта был эш башҡарыла. Шулай уҡ 27,6 километр булған канализация коллекторы төҙөү ҙә планлаштырыла, әле эш башлап өсөн траншея ҡаҙыла. Артабанғы объект - Ленин районында канализация һурҙыбы станцияһы. Әле территорияла төҙөлөшкә әҙерлек бара. Бынан тыш, "Затон" станцияһында ҡоралмалар яңыртыласаҡ һәм реконструкциянан һуң уның производство ҡеүәте тәүлегенә 46400 кубометр тәшкил итәсәк. Проект тормошҡа ашырылғандан һуң был урында 1,6 миллион квадрат метр торлаҡ һәм социаль, сәнәғәт объекттары төҙөлөшөн алып барыу мөмкин буласаҡ.

Ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков та баш ҡаланы бик күп яңы проекттар көтөүен билдәләп китте. Мәҫәлән, тиҙ туҡланыу өлкәһендәге бөтә донъяға билдәле корпорация төбәктә үҙ ресторандары селтәрен киңәйтеүгә 650 миллион һум һалырға һәм Өфөлә социаль ҡунаҡхана төҙөргә планлаштыра. Шулай уҡ заманса имплантация һәм протезлау стоматология үҙәге булдырыу өсөн медицина компанияларының береһе 170 миллион һум инвестиция һалырға һәм 100 эш урыны булдырырға ниәтләй. Дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә баш ҡалала башҡорт хоккейы легендаһы Александр Семактың һәм уның хәйриә фондының ҡанаты аҫтында күп функциялы спорт-мәғрифәт комплексы барлыҡҡа килеүе ихтимал. Тағы ла Өфөлә асарбаҡтарҙы реабилитациялау үҙәге ойошторолоуы ла мөмкин.

Һәм иң мөһиме: һайлауҙар үтте, әммә алда йылдың тағы ла бер әһәмиәтле ваҡиғаһы - Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу көтә. Ул 15 октябрҙән 14 ноябргә тиклем дауам итәсәк һәм бик күп һорауҙарға яуап биреү менән бер рәттән, башҡорттарҙың күпме икәнлеген дә асыҡлаясаҡ. Шул хаҡта ла онотмаһаҡ һәм был кампанияға етди ҡараһаҡ ине. Һуңлап булһа ла йылылыҡ та бирелер, йорттар ҙа төҙөлөр, яңы эш урындары ла булдырылыр - әммә милләтеңде рәсми рәүештә нығытып ҡуйыу мөмкинлеге тағы 10 йылдан ғына булыр...

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ЙЫЛЫЛЫҠ ӨСӨН ХАҠ АРТЫУҘЫҢ... дүрт сәбәбе

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Марат Ғәйфуллин күп фатирлы йорттарҙа йылылыҡ өсөн түләүгә хаҡ артыуға килтергән төп дүрт сәбәпте атаны.**

***Беренсе фактор*** - торлаҡ-коммуналь хеҙмәт өсөн түләү иҫәп-хисабын эшләгәндә идара итеү ойошмалары ҡулланған һәм ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмалар хеҙмәтләндергән майҙандарҙың тап килмәүе. Был осраҡта халыҡ үҙенеке булмаған, мәҫәлән, торлаҡ йорттарҙың беренсе ҡатында урынлашҡан коммерция биналары өсөн дә түләй. Тикшереү ваҡытында асыҡланыуынса, 4544 йорттоң 886-һында майҙандар тура килмәй, айырма 100 мең квадрат метр самаһы тәшкил итә. Ҡайтанан тикшергәндән һәм түләү параметрҙарын төҙәткәндән һуң халыҡтың һалҡын миҙгелдәрҙә түләү суммаһы 34,5 миллион һумға кәмей.

***Икенсе сәбәп*** - ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмалар тарафынан артыҡ күп йылылыҡ биреү. Ғәҙәттә, был ҙур ҡаҙанлыҡтарҙы һәм ТЭЦ-тарҙы файҙаланыусы үҙәк йылытыу системаһының инертлығына бәйле. Көндәр ҡапыл йылытып ебәрһә, операторҙар параметрҙарҙы тиҙ генә үҙгәртеп өлгөрә алмай һәм был фатирҙарҙың артыҡ йылыныуына һәм милексе ләрҙең форточкаларҙы асырға мәжбүр булыуына килтерә.

***Өсөнсө фактор*** - йортто йылылыҡ менән тәьмин итеү системаһының боҙолоуы һәм уның дөрөҫ эшләмәүе. Ҡоролманың дөрөҫ көйләнмәүе йәки шәхси йылылыҡ пункттарында (ИТП) дефект булыу һөҙөмтәһендә артыҡ йылылыҡ ҡулланылырға мөмкин. Тикшереүҙәр барышында баш ҡалала 761 ИТП-ның 354-ендә боҙоҡлоҡ булыуы асыҡлана һәм улар ваҡытында тейешле хеҙмәтләндереү алмай. Хәл-торошто үҙгәртеү өсөн ҡоралмалар дөрөҫ итеп көйләнә. Шулай уҡ 3305 йортта элеватор узелдары һәм дроссель шайбаларына ревизия үткәрелә. Һөҙөмтәлә 448 йортта ҡыҫыу ҡоралмалары диаметры (сопел) кәметелә. Был энергия ҡулланыуҙы 10 процентҡа кәметеү һәм 45 миллион һум экономиялау мөмкинлеге бирә.

***Дүртенсе сәбәп*** - энергияны һаҡлау сараларын башҡармау йәки оҙаҡҡа һуҙыу. Мәҫәлән, әгәр йылытыу торбалары тейешенсә изоляцияланмаһа йәки подъезд тәҙрәләрендә быялалар булмаһа.

Өфө ҡала хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, коммуналь ресурстарға түләүҙәге хәл-торошто яҡшыртыу өсөн саралар комплексы тормошҡа ашырыласаҡ. Дөйөм йорттағы йылылыҡ счетчиктарының күрһәткесен ситтән тороп алыу мөмкинлеген булдырған телеметрия ҡулланыу артыҡ йылылыҡ биреүҙе һәм ҡоралмаларҙың боҙолоуын ваҡытында асыҡларға ярҙам итәсәк. Был система ярҙамында милекселәр һәм идара итеү компаниялары гаджеттар аша телләгән ваҡытта йылылыҡ ҡулланыу күрһәткестәре менән таныша ала. Бөгөн телеметрия 2230 йорттоң йылылыҡ иҫәбен алыу ҡоралмалына ҡуйылған. Октябрь һуңына Өфөлә үҙәк йылытыу системаһы эшен контролләү өсөн берҙәм аналитика үҙәге булдырыу планлаштырыла.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПАРКТАР нindәй булырға тейеш?



**Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡала парктарын төҙөкләндереү буйынса халыҡтың фекерен алырға тәҡдим иткәйне.**

Өфө халҡы әле лә ниндәй паркты төҙөкләндереү зарурлығын асыҡлап тауыш биреүен дауам итә. Бигерәк тә Нефтехимиктар паркы өсөн әүҙем тауыш бирелә - 34 процент. Дим районындағы Үҙәк парк өсөн һәм Инорстағы Йылы күле эргәһендәге парк зонаһы өсөн 20-шәр процент тауыш бирелгән. Башҡа парктар әлегә 10 проценттан артыҡ тауыш йыя алмай. Урмансылар паркы өсөн 9 процент тауыш бирелгән, Якутов паркына - 7, Мәжит Ғафури паркына - 4, Аксаков исемендәге мәҙәниәт һәм ял баҡсаһына - 7, Ленин паркына - 3.

Ленин паркын реконструкциялау буйынса халыҡтың фекере айырымланған. Уларҙың бәғзеләре был паркты исемлектән алып ташларға, унда бары тик магазиндар ғына етешмәүен белдерә. Икенселәр сағыштырмаса матур булған Ленин паркын түгел, ә бөтөнләй емерек хәлдә булғандарын төҙөкләндерергә кәрәк, ти. Ҡайһы берәүҙәр унда кешене йәлеп итерҙәй бер нәмә лә булмауына зарлана һәм инфраструктура менән байытырға кәрәк тип иҫәпләй. "Был паркты мотлаҡ реконструкцияларға кәрәк, сөнки ул төп парк һәм визит карточкаһы булып тора. Уның аша бик күп туристар ағымы үтә, әммә, үкенескә күрә, унда спорт төрҙәренән бары тик йүгереү менән генә шөғөлләнергә була. Спорт йәки балалар майҙансыҡтары юҡ. Ошо программа сиктәрендә уларҙы эшләп ҡуйырға була", - ти икенсе өфөлө.

Ленин исемендәге парк - Рәсәй халыҡтарының төбәк әһәмиәтендәге мәҙәни мираҫ объекты булып тора. Уға 1867-1872 йылдарҙа Өфө губернаһы губернаторы Сергей Ушаков бойороғо буйынса көтөүлек урынында нигеҙ һалына. Губернатор резиденцияһы тәҙрәләре көтөүлеккә ҡарап тора, шуға унда парк эшләргә ҡарар ителә, һуңынан уға Ушаков паркы исеме бирелә.

Парк ҡала халҡының беренсе йөмәғәт ял итеү урыны тип һанала. Тиҙҙән паркта каруселдәр, беседкалар һәм павильондар, "Мир" йәйге кинотеатры, һәм беренсе фонтан, уны биҙәп торған, ямғырҙан ҡасыусы балаларҙы һүрәтләгән "Беренсе мөхәббәт" скульптураһы барлыҡҡа килә.

Паркка Софья аллеяһы, Зыя Нуриев исемендәге сквер, Ленин урамының йәйәүлеләр зонаһы һәм ArtTerria аллеяһы, шулай уҡ Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Йорто скверы терәлеп тора.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән кәңәшләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Простатит

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләне, яртышар ҡалаҡ һары мәтрүшкә, мәтрүшкә үләндәре, 3-4 бөртөк гөлбаҙран сәскәһе, семтем әрем үләнен алып, ярты литрлыҡ банкаға һалырға һәм яңы ғына уттан алынған ҡайнар һыу ҡойорға, ҡаплас ябып 20 минут төнәтергә. Төнәтмәне һөҙөп, тәүлегенә 3-4 тапҡыр яртышар стакан сәй ҡеүек эсергә. Был дауаны 3-4 көн эсеп алғас та, хәл яҡшырыуы тойола. 10 көндән һуң 3 көнгә туҡтап торорға һәм тағы ла шул рәүешле 2 тапҡыр ҡабатларға. Шулай итеп, тулы дауаланыу осоро 36 көн тәшкил итергә тейеш. Гөлбаҙран ағыулы үҫемлек һәм уны самаһынан артыҡ тотонорға ярамай.

❖ Сәтләүек ҡыуағының (лещина) әле йәшелләнеп торған ҡайырыһын ваҡлап 1 ҡалаҡ, ваҡланған петрушка тамырынан 3 бөртөк алырға. Әҙерләмәгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡаплас менән ябырға һәм 20 минут талғын утта ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм көн дауамында һыу урынына эсергә.

❖ Ҡайын япрағы, сәтләүек ҡыуағы (лещина обыкновенная) япрағы, баҫыу ҡырҡбыуыны үләнен нисбәте буйынса бер тигеҙ күләмдә алырға. Йыйылманың 4 ҡалағына 3 стакан һыу ҡойоп, ҡаплас ябып талғын утта 5-7 минут тоторға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Бер ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр ярты шар стакан эсергә.

## Энурез

❖ Халыҡ дауаһы был сирҙән шифалы шалфей үләне төнәтмәһен эсергә кәңәш итә. Уны әҙерләү өсөн 40 грамм киптерелгән үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға торорға, 2 сәғәт төнәткәс һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 100-200 мл эсергә.

❖ Шулай уҡ шалфей һәм укроп орлоғонан әҙерләнгән дауа ла яҡшы. 1-әр ҡалаҡ киптерелгән шалфей үләне һәм укроп орлоғон алып, 2 стакан һыу ҡойорға һәм талғын утта 5 минут тоторға. 1 сәғәт төнәткәс һөҙөргә. Төнәтмәне 3-4-кә бүлеп көн дауамында эсеп бөтөргә. Дауаланыу осоро 5 көн. Укроп орлоғон бешереп те тормаҫҡа һәм борщ йәки ашҡа семтемләп һалып ашарға була. Шифалы шалфейҙы бөйөрҙә киҫкен шешеү процестары һәм ҡаты йүтәл булғанда ҡулланыу кәңәш ителмәүен хәтерҙә тотоғоҙ.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Малсы күскенсе халыҡтар ағас эшкәртеү оҫталығын Боронғо Төрки цивилизацияһының иртә осоронда үҙләштереүен бик күп эш ҡоралдарының һәм ағас әйберҙәрҙе эшләү ысулдарының башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, якут, Көньяҡ Себер халыҡтары (хакас, тыва, алтайҙар) һәм ҡайһы бер монгол халыҡтарында (айырып әйткәндә бүрәттәрҙә) оҡшашлығы ла дәлилләй. Оҫталар тәү сиратта көнкүрештә кәрәк әйберҙәр яһаған. Этномәҙәни параллелдәр ағас әйберҙәрҙең формаһына ла ҡағыла. Йыш ҡына терминология ла бер төрлө. Төрки халыҡтарҙа "балта" һүҙе киң таралған, ул монголдарҙа ла осрай ("балт"). Аталғы атамаһын ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, татар һәм якуттар ҡуллана. Был ҡоралды Төньяҡ Кавказда: Осетия, Дағстан һәм башҡа ерҙәрҙә лә белгәндәр.

Ҡыҙғаныҫҡа күрә мәҙәниәттең бөтә элементтарын да ваҡыт арауығына тап килтереп булмай. Күп кенә эш ҡоралдары һәм тәү сиратта хужалыҡ эшмәкәрлегенә бәйле әйберҙәр этник сиктәрҙән сығып, ҙур территорияға таралып киткән. Улар сығыштары, телдәре, диндәре төрлө булған халыҡтарҙа ҡулланыла һәм кемдәр уйлап табыуын теүәл генә билдәләүе мөмкин түгел. Мәҫәлән, бөтөн ағастан өңөп эшләнгән кәмәләр - ҡайыҡтар менән шулай килеп сыҡҡан. Кәрәкле ағас һәм йылға-күлдәр бар ерҙәрҙә йәшәгән башҡорттар уларҙы эшләй белгән. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостанда был кәмәләрҙең берҙәм формаһы булмаған. Ҡайыҡтарҙың ҡайһы берҙәре Көнсығыш Европа һәм Себерҙең яҫы төплө (күкрәкһеҙ) кәмәләрен, икенселәре - Себерҙә Обь йылғаһы буйында һәм Енисейҙа килле "обласка", "обласок" тип йөрөтөлгән кәмәне хәтерләткән. Башҡорт кәмәселәренең айырым оҫталыҡ мәктәбе хаҡында ла телгә алып үтергә кәрәк. Был мәсьәләне М.Г. Муллағолов тикшергән, ул кәмәләрҙе эшләү алымдарын тасуирлап, кәсептең урындарҙағы үҙенсәлектәренә иғтибар иткән. Мороно һәм ҡойрого күтәрелеберәк торған, борттары айырылып киткән кәмәләр формаһы буйынса камилыраҡ булған. "Кәмәне башлыса Өфө өйәҙендә Ҡариҙел йылғаһы буйындағы башҡорт ауылдарында эшләйҙәр", - тип яҙа XIX быуат уртаһында В.М. Черемшанский. Әммә кәмә етештерелгән территория бынан киңерәк булған. Уларҙы Еҙем, Ләмәҙә, Инйәрҙә эшләгәндәр. Өфө ҡалаһынан төньяҡта Ағиҙел буйында ла осраған улар. Шулай уҡ көньяҡ-көнсығыш Урал арьяғының төбө яҫы һәм тигеҙ бортлы итеп эшләнгән ҡайыҡтары ла ҡыҙыҡлы. Улар морононда йоморайтылған йәки тура дүртмөйөшкә тартым сығынты эшләнеүе менән үҙенсәлекле. Өйрәктеке кеүек һонолоп торған мороно бындай йөмро кәмәләр тураһында 1958 йылда этнографтарға Әбйәлил районының Ташбулат ауылында йәшәүсе ололар һөйләгән.





*Ҡайыҡтар. Дүртөйлө районы, 1979 йыл. Т.К. Сурина фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БЕСӘН ЮҠ, ТИП...

## малдарҙы бөтөрмәйек әле



**Һуңғы осорҙа иң киҫкен проблемаларҙың береһенә әүерелгән янғындар бөгөнгә көнгә яйлап ауыҙлыҡланды. Әммә ошо янғындарҙың эҙемтәһе башлыса малсылыҡ менән көн иткән райондар халҡы өсөн бик тә аянысһы булып сыҡты.**

Янғындар һәм ҡоролоҡ төп мал аҙығын - бесәнде юҡҡа сығарҙы. Шуға күрә күптәр малдарын һата, йә һуйып тотона башланы. Былай ҙа һуңғы йылдарҙа республикалағы шәхси хужалыҡтарҙа малдар күпкә кәмене. Мәҫәлән, элек беҙҙең ауылда 300 баш тирәһе эре мал булһа, хәҙер 30-лап ҡына ҡалды. Башҡа ауылдарҙа ла хәлдәр яҡшынан түгел. Баҙарҙарҙа ит һатыусылар әйтеүенсә, малдарҙы уларға күпләп тәҡдим итә башлағандар...

Билдәле булыуынса, Баймаҡ районында ПРФ 145-ле төк бесәндең хаҡы 2000-2800 һум, Еҙәнсурала 2000-2500 һум тора, башҡа райондарҙа ла хаҡ бик юғары. Бер баш һыйыр малына бер ҡышҡа яҡынса 8 төк китә. Тимәк, һыйырҙы ҡыш сығарыу өсөн бесәнгә генә 16-20 мең һум аҡса кәрәк. Быҙау хаҡы 12-15 мең һум тип һанаһаҡ, мал тотоуҙың ихтисади яҡтан бер файҙаһы ла ҡалмай. Бесәндән башҡа сығымдарҙы ла иҫәпкә алһаҡ, мал тотоп ҡына көрсөккә төшөргә мөмкин, тип уйларлыҡ бит! Шуға ла шәхси хужалыҡтарҙа малдар һаны кәмеүенә бер ҙә аптырарға ярамай һәм был тенденция артабан да дауам итәсәк әле.

Әлбиттә, хәлде тасуирлап, мин бер кем өсөн дә ниндәйҙер яңылыҡ асманым. Был - барыбыҙға ла билдәле хәл. Тик ошо хәлде белеп тә, артыҡ тыныс ултырған түрәләр, депутаттар, йәмәғәт ойошмалары һәм эшмәкәрҙәр, журналистар, хатта блогерҙар аптырата. Күп осраҡта юҡ ҡына мәсьәләне лә йыһан киңлегенә күтәреп, бөтә интернет селтәрен тултырыусылар, ни эшләптер, был хаҡта ләм-мим.

Бәлки, кемдер быны тик мал тотоусыларҙың ғына бәләһе, тип уйлайҙыр. Әммә был дөйөм ауыл халҡы, бигерәк тә башҡорттар өсөн бик мөһим мәсьәлә ул. Сөнки башҡорт кешеһе тамырҙары менән ауылға бәйләнгән, ә унда улар ғүмер буйы мал тотоп йәшәгән. Малһыҙ ҡалған башҡортто ауыл менән бер ни ҙә бәйләмәй, ерҙең дә ҡәҙере бөтә. Сөнки атай-олатайҙарҙан ҡалған сабынлыҡтар, көтөүлектәр, пай ерҙәре малһыҙ башҡортҡа кәрәкһеҙ булып сыға. Икенсенән, малһыҙ кешенең йәшәү сығанағы ла үҙгәрә. Мәҫәлән, үткән быуатта ҡалаға эшкә китеүселәр - "зимагорҙар" барлыҡҡа килгән. Улар унда хәмер эсергә, тәмәке тартырға һәм башҡа башҡорт халҡына хас булмаған ҡылыҡтарға өйрәнеп ҡайтып, ошо әшәке "вирустар"ҙы йәмғиәткә таратҡан. Хәҙерге Себерҙә эшләүсе вахтасылар шул уҡ зимогорҙар булып бара бит. Быйылғы ҡоролоҡ һәм уның эҙемтәләре эш эҙләп ситкә сығып китеүселәрҙе бермә-бер арттырасаҡ.

Малһыҙ ҡалыу башҡорт халҡының тамырына балта сабыуға бәрәбәр булыуын дәлилләп, тиҫтәләгән миҫал килтерергә мөмкин, әммә быны менән хәл үҙгәрмәйәсәк. Хәлде үҙгәртеү өсөн анығ эштәр кәрәк. Ошо арала Баймаҡ районының тиҫтәләгән егете Архангел районының төрлө ауыл биләмәләрендә бесән саба. Әлбиттә, иҫке техника һәм ҡорамалдар менән ҡоралланған, урманда ҡыуыш ҡороп йәшәп, аслы-туҡлы йөрөгән был аҫыл егеттәр, ни тиклем генә тырышһалар ҙа, үҙ төбәгенең бесәнгә мохтажлығын ҡаплай алмаясаҡ. Был эште башҡараҡ кимәлдә ойоштороу зарур.

Үҙемдең тәҡдимдәремде яҙып үтәйем. Тәү сиратта, республиканың ауыл халҡын бесән менән тәьмин итеүҙе ойоштороу өсөн дөйөм штаб булдырыу фарыз. Уның эшенә бар кимәлдәге власть органдарын йәлеп итергә кәрәк. Эште башлап ебәреү өсөн һәр район хакимиәтенә шәхси хужалыҡтарҙағы мал аҙығы буйынса мәғлүмәт туплауҙы йөкмәтергә, мохтаждарҙың исемлеген булдырырға; Иглин, Архангел кеүек ҡоролоҡ булмаған райондарҙа әле сабылмаған ерҙәрҙе билдәләп сығырға; МТС һәм башҡа төрлө ойошмаларҙы, шәхси хужалыҡтарҙағы техниканы йәлеп итеп, ошо бесәнлектәрҙе сабып, йыйыуҙы ойошторорға кәрәк, тип тәҡдим итәм. Ғәҙәттән тыш хәлде иҫәпкә алып, бесән ташыуҙа, машина-тракторҙарҙы яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙә ярҙам һорап, төрлө ойошмаларға мөрәжәғәт итергә була. Райондарҙа социаль ярҙамға мохтаж кешеләрҙең исемлеген булдырып, һәр ғаиләгә 1 һыйыр, 1 быҙау, 8 һарыҡты бесән менән тәьмин итеүҙе ойошторорға кәрәк. Ә башҡорт атын һаҡлау программаһына ярашлы, рәсми рәүештә һәр теркәлгән башҡорт атына 3 төк бесән бирергә кәрәк. Һаламды ла төкләп таратырға мөмкин.

"Ятып ҡалғансы атып ҡал", тип халыҡ хаҡ әйткән. Өләсәйем "Ҡар өҫтөнән ҡарға тиҙәге лә табылмай", - ти торғайны. Ҡар яуғансы ваҡыт бар, бергәләп тотонғанда хәл итмәҫлек мәсьәлә түгел. Тик теләк һәм эште башлап ебәреү генә кәрәк.

**Билдәһеҙ автор сәхифәһенән.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тура эфирҙа халыҡ менән аралашҡан саҡта Хәйбулла районынан крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе Илгиз Тазетдинов быйыл ҡоролоҡтан зыян күргән хужалыҡтарға ярҙам күрһәтеүҙе һорап мөрәжәғәт иткәйне. "Өс йыл рәттән Хәйбулла районы аграрийҙары ҡоролоҡтан зыян күрә, үткән йәй иң эҫеһе булғандыр. Сәсеүлектәр зыян күрҙе, ултыртылғандан да әҙерәк уңыш алынды, эҫенән үлән дә, бесәнлектәр ҙә зыян күрҙе, малға аҙыҡ әҙерләй алманыҡ, хужалыҡтар ауыр хәлдә. Хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы, һалымдар, яғыулыҡ-майлау материалдары өсөн, халыҡтың пай ерҙәрен ҡулланған өсөн түләргә кәрәк. Киләһе миҙгелгә орлоҡтар һатып алыуҙа һәм малды ҡыш сығарыу өсөн аҙыҡ менән тәьмин итеүҙә ярҙам һорайбыҙ", - тине фермер. Радий Хәбиров был һорауға яуап биреп, ҡоролоҡтан иң ныҡ зыян күргән Хәйбулла, Еҙәнсура, Йылайыр һәм Баймаҡ райондары хужалыҡтары сығымдарының субсидиялар менән ҡапланасағы тураһында әйтте. Шулай уҡ мал һаның тотороҡло һаҡлап ҡалыу өсөн республиканың Ауыл хужалығы министрлығы менән берлектә шәхси хужалыҡтарҙың мал аҙығы алыуға киткән сығымдарын 50 процентҡа субсидиялау ҡаралған. Орлоҡ һәм ауыл хужалығы техникаһы алыуҙа ла ярҙам күрһәтеләсәк. Субсидия ауыл Советынан белешмә буйынса түләнәсәк. "Беҙ халыҡ һәм фермерҙар малын һуйып һата башлар, мал һаны кәмер, тип борсолабыҙ. Шуға хатта уны үҙебеҙ һатып алып, ҙурыраҡ хужалыҡтарға тапшырырға әҙербеҙ. Шәхси хужалыҡтарға малға аҙыҡ алыуға түләгән хаҡтың 50 процентына субсидия бирәбеҙ. Шулай уҡ орлоҡ һатып алыуҙың да ярты хаҡына субсидия билдәләнә. Был райондарҙың ауыл хужалығы эшсәндәренә ярҙам итеү маҡсатында 75 млн һум бүләбеҙ", - тине республика етәксеһе.

Шулай итеп, юғарылағы хатҡа яуап рәүешендә бирелде был мәғлүмәт. Әммә урындарҙа республика Башлығының был һүҙҙәре нисегерәк үтәлә икән?

✓ *Башҡорт халҡы хаҡында Владимир Даль ошолай яҙған: "Народ башкурт разделился с незапамятных времен на племена, на волости; у каждой волости свой уран, отклик, рукоприкладный знак, свое дерево и птица…"*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Көнбайыш башҡорттарының артыҡ ҙурҙарҙан булмаған башҡа ырыуҙары араһында ҡаршын ырыуы ла бар. Был ырыу башҡорттары нигеҙләгән ауылдар, башлыса, хәҙерге Кушнаренко, Өфө һәм Благовар райондарына ҡарай. Әйтергә кәрәк, боронораҡ бер бөтөн булған оло башҡорт ырыу-ҡәбиләләренән, тарихи процестар барышында айырымланып китеп, башҡа бер географик тарафҡа күсеп йәшәй башлаған этник төркөмдәр тора-бара үҙ атамаһы булған бәләкәйерәк ырыуҙарҙы хасил иткән. Яңы этноним алған хәлдә лә улар быуаттар буйына барса ырыуҙарға хас булған башҡортлоғон юғалтмаған. Ҡаршын ырыуының әлеге көнгә билдәле булған тарихы ошоно раҫлай. Башҡорт халҡының ошондай этник үҙенсәлеге хаҡында XIX быуатта йәшәгән рус лексикографы Владимир Даль ошолай яҙған: "Народ башкурт разделился с незапамятных времен на племена или, как их называют у нас, на волости; у каждой волости свой уран, отклик, рукоприкладный знак, свое дерево и птица, розданные, как верит народ, самим Чингиз-ханом…"**

# БЕҘ - ҠАРШЫНДАР, ЯУГИР ЗАТЛЫ БАШҠОРТБОҘ



Бөтөн Русия батшаһы титулын алған Иван Грозный дәүләте составына ҡушылғандан һуң Башҡорт иленең административ төҙөлөшө башҡорт ырыуҙары биләгән аҫаба территорияларға ярашлы билдәләнеп, батша хакимиәте документтарында волость, йәғни олоҫ топонимы менән теркәлә. Башҡорт олоҫтары араһында Ҡаршын олоҫо ла була. XVIII быуатта дәүләт эшмәкәре һәм тарихсы булып танылыу тапҡан П.И. Рычков Ҡаршын ырыуы составында Аҡбаш, Ҡарғанар (Ҡарғалар) һәм Ҡәҙрәй түбәләре булыуын яҙып алған.

Ә XIX быуатта ул замандағы прогрессив рус яҙыусылары һәм ғалимдары башҡорт этник мөхите менән айырыуса ныҡ ҡыҙыҡһына, Рәсәйҙең ваҡытлы матбуғат баҫмаларында һәм ғилми нәшриәттә башҡорт тормошон һүрәтләгән нәфис һәм ғилми яҙмалар донъя күрә. Сығышы менән хакастарҙан булған билдәле тарихсы-этнограф, Ҡаҙан университеты профессоры Катанов Николай Федорович 1897 йылда Өфө губернаһында ғилми экспедиция ойоштора, башҡорт, мишәр, типтәр һәм керәшендәрҙең этник үҙенсәлектәрен өйрәнеү маҡсатында тикшеренеүҙәр алып бара. XX быуат башында үҙ халҡының тарихы менән айырыуса ныҡ ҡыҙыҡһынған йәш ғалим Әхмәтзәки Вәлидов та рус ғалим-ғөләмәләре араһынан Н.Ф. Катановты үҙенең фән өлкәһендәге тәүге уҡытыусыһы итеп ҡабул итә. Ул 1913 йылда төрки зыялыларының уртаҡ баҫмаһы булған "Шура" журналында "Бөрйән башҡорттары араһында" тип аталған этнографик мәҡәләһен баҫтыра, унда Н.Ф. Катановтың башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең килеп сығышы хаҡындағы фекерҙәрен дә иҫкә ала: "Теркәлеп ҡалдырылған башҡорт олоҫтарынан - Мең, Табын, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Меркет, Ҡатай, Гәрәй, Тазлар, Ҡырғыҙ - төрки сығышлы ырыуҙарҙан иҫәпләнә. Әммә башҡалары - Арлар, Саралы, Ыуаныш, Ҡыуаҡан, Ҡаршын һәм уларға оҡшаштары - фин-уғыр сығышлы. Катанов башҡорттарҙы төркиләшкән финдар, тип иҫәпләй".

1904 йылда крайҙы өйрәнеүсе, этнограф һәм геолог Дмитрий Соколов "Башҡорт тамғалары хаҡында" исемле мәҡәләһен баҫтыра, ул унда Ҡаршын ырыуының Йылан тип аталған оло башҡорт ҡәбиләһенең бер тармағы булыуы тураһындағы фаразын килтерә: "Кыр-Иланское отделение Иланского (вероятно, точнее Йиланского) племени имеет тюбы Сатлыкову, Кадряеву и Каршинскую. Последняя совпадает с названием Каршинской волости у Рычкова, которая заключает, как собственную часть Кадряеву тюбу. Отсюда ясно, что особого Каршинского племени нет". Әммә тарихсыларға билдәле булған сығанаҡтарҙа Йылан ырыуы территорияһына ҡараған ерҙәрҙә үрҙә атап кителгән түбәләр теркәлмәгән. Был тикшеренеүсе Д.Н. Соколов фаразының ысынбарлыҡҡа тап килмәүен күрһәтә. Киреһенсә, рус чиновниктары төҙөгән документтарҙа тап Ҡаршын (Каршинская) олоҫонда Һатлыҡ/Һатлыған (Сатлыкова/Сатлыганская), Ҡәҙрәй (Кадряева) һәм Ҡаршын түбәләре теркәлгән. Күренекле этнограф, башҡорт ырыуҙары тарихын бик ентекләп өйрәнгән Р.Ғ. Кузеев та Ҡаршын олоҫонда Ҡәҙрәй-Ҡаршын, Ҡарға-Ҡаршын һәм Һатлыған (йәки Аҡбаш)-Ҡаршын түбәләре булыуын раҫлай.

Р.Ғ. Кузеев Н.Ф. Катановтың ҡаршындарҙың фин-уғыр сығышлы булыуы хаҡындағы фаразы менән килешмәй. Ул ҡаршын этнонимының этимологияһы аша ошо ҡәүемдең төрки телле халыҡтарҙан булыуы хаҡында яҙа: "Ҡаршын (каршин) этнонимы нигеҙен ҡаршы (карши) формаһында күҙаллап була. Уйғыр телендә "ҡаршы" һүҙе "ҡәлғә", нығытылған ҡала" тигәнде аңлата. Уны борон башҡа төрки ҡәүемдәре лә үҙләштергән; Урта Азияла күрһәтелгән нигеҙ менән исемләнгән байтаҡ ҡына торлаҡ пункттарын табырға була. Ошо аспектта ҡаршын атамаһы, балыҡсы, ирәкте кеүек үк, "нығытылған ҡала һаҡсылары" тигәнде аңлатыуы мөмкин". Әйтергә кәрәк, "балыҡсы" ырыуы атамаһының килеп сығышын да ғалим Р.Ғ. Кузеев балыҡ тотоусы кешеләр менән түгел, ә боронғо төрки телендәге "baliq", йәғни ҡала һүҙе менән бәйләп аңлата: урта быуаттарҙа Азия төркиҙәре ҡалаларын һаҡлаусы яугиҙар балыҡсы (балыкчи), тип аталған. Әлбиттә, ошо фаразда ла шикләнерлек ерлек бар: бөтөн донъяға билдәле Орхон-Енисей ташъяҙмаларында ҡала кешеләре "baliqdaqi" (балыҡдаҡы) һүҙе менән теркәлгән.

XI быуатта йәшәгән күренекле тел ғалимы Мәхмүт әл Ҡашғари төҙөгән төрки телдәре һүҙлегендә ("Диван лугат ат-Турк") "карши" һүҙенең "король, йәғни падишах һарайы" тигәнде аңлатыуы теркәлгән. Шулай уҡ XI быуатта йәшәгән төрки шағиры Йософ Баласағуни тарафынан яҙылған "Кутадгу билиг" ("Ҡот килтереүсе белем") поэмаһында ла "карши" бер нисә тапҡыр ҡулланылған: "ичип каршика кирмә" - эсеп алғас, һарайға кермә, "өлүм бузди карши сарай ев үкүш" - үлем күп һарай һәм өйҙәрҙе боҙҙо (юҡ итте). Әйткәндәй, әүәл хан йәшәгән бина боронғо төрки телендә "карши сарай", тип аталып йөрөтөлһә, һуңынараҡ - XIII быуатта, монгол-татар яуҙарынан аҙаҡ, ошо һүҙбәйләнештең "һарай" тигәне генә ҡулланыла башлай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Рейд барышында 112-се атлы дивизияға Чернухино станцияһына табан һөжүм итеп, башҡа дивизияларҙың частары менән берлектә уны дошмандан азат итеү бурысы ҡуйыла. Тәүҙә Чернухинолағы дошман көстәрен барлау маҡсатында ул яҡҡа лейтенант Ниғмәт Бикмәтов етәкселегендәге разведчиктар төркөмө ебәрелә. Улар немецтарҙың ашығыс рәүештә Дебальцево станцияһын нығытыуы, тимер юлда бик күп эшелондар туплаңыуы, көнбайыштан был яҡҡа табан яңы өҫтәлмә көстәр килтерелеүе хаҡында мәғлүмәт алып ҡайта. Быларҙы иҫәпкә алып, Чернухино һәм Дебальцево станциялары тарафына дошманға һиҙҙертмәйенсә барып сығып, ул көтмәгәндә һөжүм итергә, тип хәл ителә.

294-се полктың авангардта барған эскадроны төнгә ҡарай, яландағы тәрән ҡарҙы ярып үтеп, Чернухино станцияһы янына килеп етә. Бында уларҙы беҙҙең разведчиктарҙан лейтенант Н. Бикмәтов һәм рядовой М.Ғайсаровтар ҡаршы ала. Улар Чернухино станцияһының көнбайыш яғында бик яҡшы ҡоралланған дошман ғәскәре тороуы хаҡында белдерә. Генерал-майор М.М. Шайморатов 294-се полктың 1-се һәм 2-се эскадрондарына кисекмәҫтән Чернухиноға бәреп инергә бойора. Ҡаты алыш башлана. Беҙҙең минометсылар айырыуса оҫталыҡ күрһәтә: сержанттар С.Ш. Мөхтәров һәм Т.М. Петров дошмандың 8 пулеметын миналар менән ҡаплап, улар яуҙырған утты томалай. Рядовой С.К. Шәмиғолов, бер өй янында үҫкән ағасҡа үрмәләп менеп, сарҙаҡтан атып ятҡан пулемет расчетын гранаталар менән юҡ итә. Сабельниктар взводы командиры З.С. Иҫәнгилдин, үҙенең взводы менән дошман тылына үтеп инеп, паника тыуҙыра. Дошмандан таҙартылған таш өйҙәрҙең подвалдарын беҙҙең яугирҙар контратакаға ташланған немецтарға ҡаршы торор өсөн дзот урынына файҙалана.

Алыш ҡыҙғандан ҡыҙа бара. Чернухиноға бергәләп һөжүм итеүсе 112-се һәм 55-се атлы дивизиялар дошман авиацияһы тарафынан бер туҡтауһыҙ бомбаға тотола, беҙҙең подразделениеларҙа юғалтыуҙар арта бара. Шуға ҡарамаҫтан, Чернухино станцияһының көнсығыш яғынан дошман ҡыҫырыҡлап сығарыла. Станция уртаһындағы йырын беҙҙең яугирҙар һәм немецтар араһындағы алғы һыҙыҡҡа әйләнә.

1943 йылдың 14 февралендә 8-се корпустың рейдтағы частары Дебальцево станцияһына һөжүм итә. Бында дошмандың бик яҡшы ҡоралланған, беҙҙең һөжүм итеүсе частарҙан һан яғынан да күпкә өҫтөнөрәк булған ғәскәре урынлашҡан була. Улар беҙҙең яугирҙарға ҡаршы күтәрелә, әммә гвардия минометтары уты аҫтында ҡалып, кире сигенергә мәжбүр ителә. Иң мөһиме, 8-се кавкорпус быға тиклем Ворошиловградтағы немец частарын тәьмин итеү өсөн ҡулланылған тимер юл коммуникацияларын киҫеп, ундағы дошман ғәскәрен ярҙамһыҙ ҡалдыра. 14 февралдә, бик көслө артиллерия утын ҡулланып, 3-сө гвардия армияһы соединениелары, ике танк һәм 18-се уҡсы корпустары ярҙамында Ворошиловград ҡалаһын дошмандан азат итә. Шул уҡ көндә Краснодон ҡалаһы ла дошмандан таҙартыла.

Ҡыҙыл Армияның Донбастағы ошо уңышлы һөжүме 8-се атлы корпустың, унын авангардында барған 112-се атлы дивизияның иҫ киткес ҡаһарманлығы, бик күп яугирҙарыбыҙҙың дошман тылында батырҙарса алышыуы, йөҙәрләгән, меңәрләгән егеттәрҙең яраланыуы һәм үлеме менән бермә-бер бәйле. Һуғыш үҙенең ҡорбандарын алмайынса ҡалмай шул: Бөйөк Ватан һуғышының еңелеүле лә, еңеүле лә хәрәкәттәре һәр осраҡта ла миллиондарса яугирҙарыбыҙҙың Тыуған ил хаҡына йән аямай алышыуының, уларҙың ватансылыҡ менән һуғарылған ғүмерҙәренең данлы вә шанлы тарихылыр ул.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Алдағы йылда беҙҙең интернат-мәктәптә тамамлауыбыҙға 45 йыл тула. Ҡайтышлай, шул датаны үткәреү планын ҡорҙоҡ. Уртаҡ китап яҙыу идеяһы ла тыуҙы. Ул китапты һәр кем күңеле ҡушҡанса яҙһа, дөрөҫ булыр тибеҙ.*



## ЯҢЫ РУБРИКА: "ӨФӨЛӘРҘӘ БАР БЕР АУЫЛ"

**Ауылыбыҙҙан тәүләп ҡалаға килгән сағыбыҙҙы иҫкә төшөрәйек. Күңелдә шундуҡ ятһыныу тойғоһо ялмап ала. Меңәрләгән кеше араһында яңғыҙыңдың, берәү ҙә һинең менән һаулыҡ һорашмай, бөтәһе лә һиңә килмешәк күреп ҡарай һымаҡ, берәй етешһеҙлегеңде күреп көлә төҫлө. Ҡалаға өйрәнеүе бик ауыр, өйрәнә алмағандар кире ауылына ҡайта. Шуға күрәләр ҙә, ауылдан ҡалаға килеп, шунда йәшәп киткән һәр кем туғандарын, дуҫтарын, класташтарын, ауылдаштарын, райондаштарын янына туплап, күңелендә бушап ҡалған тыуған ауылы мөхитен барлыҡҡа килтерергә тотоналыр. Ҡалала тыуып үҫкән кеше менән ауылдан ҡалаға килгән кешенең төп айырмаһы ла ошондалыр, буғай.**

**Шуныһы иғтибарға лайыҡ: рәсми булмаған бындай ойошмалар элегерәк нәҡ ауыл принцибы буйынса ҡунаҡҡа саҡырышып аралашһа, йыш күрешеп йәшәһә, тәүҙә телефондың, аҙаҡ интернеттың барлыҡҡа килеүе ундай ауылдарҙың яңы формаларын ойоштороу мөмкинлеген бирҙе: улар социаль селтәрҙәге төркөмдәр, чаттар һ.б. Ҡалаларҙа барлыҡҡа килгән ошондай ауылдарҙы икенсе төрлө граждандыҡ йәмғиәтенең ячейкалары тип тә атарға мөмкин булыр ине. Тарих шаһит: дәүләттәр тарҡалғанда ла, халыҡтар юҡҡа сыҡҡанда ла йәшәй бындай ауылдар, аҙаҡ улар тағы ла халыҡ булып ойошоп, артабан дәүләтен барлыҡҡа килтерә.**

**Гәзиттә ошо хаҡта һүҙ башлап, яңы рубриканы образлы итеп "Өфөләрҙә бар бер ауыл" тип атарға булдыҡ. Рубриканы "Ҡалаларҙа бар бер ауыл" тип тә атарға мөмкин булыр ине, әммә "Киске Өфө" гәзите өсөн баш ҡала, Өфө районында, Өфөлә рухи нигеҙе һалынып та, ауылдаштары оло донъяға таралып, әммә Өфөнө ойошоу урыны тип иҫәпләгән берләшмәләр мөһимерәк. Бисмиллаға тәүге Ауыл менән танышайыҡ. Унда беҙҙе Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы директоры, Башҡортостан Республикаһы мәғарифы отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Гөлназ Ғафир ҡыҙы ӘХМӘҘИЕВА алып инә.**

# ЙӘНЕБЕҘ ЯЛ ИТКӘН



**Гөлназ Ғафир ҡыҙы, ҡалаға килгән ауыл кешеһе һәр саҡ күңелендәге ауылын төҙөп, шуның йылыһында йәшәргә ынтыла. Һеҙ күп йылдар Ишембайҙа йәшәгәнһегеҙ, шунан Өфөгә күсеп килгәнһегеҙ. Рухи ауылығыҙҙы нисек төҙөнөгөҙ?**

- Был рубрика бик ҡыҙыҡ һәм беҙҙеке булмаҡсы. Сөнки һуңғы ваҡытта бик күптәр тыуған ауылдарын ташлап китергә мәжбүр. Тарихыбыҙға боролоп ҡараһаҡ та, бик күптәр ауылдарынан ситкә киткән. Әхмәтзәки Вәлиди ҙә сит илдә ғүмере буйы тыуған ауылын, туғандарын һағынып йәшәй бит.

Мин Ишембай районының Ғүмәр ауылында тыуып үҫтем. 6-сы класты тыуған ауылым мәктәбендә тамамлағас, 7-сегә Өфөгә 1-се Республика интернат-мәктәпкә уҡырға килдем. Ауылым менән хушлашыуым тап шул мәлдә булды. Тыуған ауылымды һағыныуым, юҡһыныуым интернат-мәктәптә үткән бала сағымдан алып әле лә дауам итә. Ул бушлыҡты тултырыу теләгем һәр ваҡыт ҙур булды. Минең артымдан эйәреп, өс туғаным интернат-мәктәпкә уҡырға килде. Ғаиләбеҙҙәге биш баланан дүртәүебеҙ ошо 1-се Республика интернат-мәктәптә тамамланыҡ. Беҙҙең ауылдан тағы ла Рәйсә Кузбәкова, Миннур Ғәббәсова, Фәрит Иҫәнғолов исемле егет уҡыны. Беҙ интернатта уҡ үҙебеҙҙең Ауылды булдырғайныҡ. Каникул ваҡытында "Өфө-Күмертау" поезы менән күмәкләп ауылға ҡайтҡаныбыҙҙы ла иҫләйем. Мине, бәләкәй булғас, поездың иң юғары кәштәһенә яткыралар ҙа, башҡалар юл буйына гәпләшеп, көләшеп ҡайта инеләр.

Ысынлап та, туғанлыҡ, яҡташлыҡ, дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек буйынса барлыҡҡа килгән ойошмалар бик күп. Хәҙер ундай ойошмаларҙы корпорация тиҙәр, беҙҙеңсә, башҡортса, ул, ысынлап та, ауыл. Тамырҙары тыуған ерендә булған ауылдыр, бәлки. Хистәре, принциптары, маҡсаттары, менталитеты бер булған кешеләрҙе берләштергән ойошмалыр ул Ауыл. Рәсми булмаған ойошма. Ундай ойошмалар бигерәк күп, уларҙың формаһы ла үҙгәрҙе. Социаль селтәрҙәрҙә шундай төркөмдәр, чаттар барлыҡҡа килде. Был беҙгә яңы һулыш бирҙе. Беҙҙең, интернатта уҡыған класташтарҙың, балалар үҫеп етеп, ейән-ейәнсәрҙәр тыуа башлағас, профессиональ яҡтан ниндәйҙер дәүеребеҙ үткәс, бер-беребеҙ менән аралашыу ихтыяжы килеп тыуҙы. "Интернатым - пар ҡанатым" тип тә юҡҡа әйтелмәгәндер. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың Ауылы бар, ә беҙҙең класташтарҙың Ауылы бөгөн 24 кешенән тора. Әле 44 йыл үткәндән һуң да беҙ шундай ойошма булып йәшәйбеҙ. Бер туҡтауһыҙ хәл белешәбеҙ, яңылыҡтар, һөйөнөстәр, көйөнөстәр менән уртаҡлашабыҙ. Йәғни, ауыл кешеләре нисек аралашһа, беҙ ҙә улар кеүек мәғлүмәт менән бүлешәбеҙ. Бер-беребеҙгә файҙалы кәңәштәр бирәбеҙ. Арабыҙҙа фән кандидаттары, медицина фәндәре докторы бар, улар беҙгә профессиональ кәңәштәрен бирә. Эшҡыуарҙар ҙа бар. Егеттәребеҙ күберәк ауылда йәшәй. Беҙҙең күп осрашыуҙарыбыҙҙы, сараларыбыҙҙы ойоштороп йөрөүсе Илдар Латыпов атлы егетебеҙ, үкенескә күрә, вафат булды. Ул билдәле офтальмолог ине.

Айына бер тапҡыр осрашып торабыҙ. Унда барыбыҙ ҙа килә алмай, әммә йылына бер тапҡыр күмәкләп йыйылабыҙ. Үткән йылда барыбыҙға ла тиерлек 60 йәш тулды. Шул уңайҙан Миәкә районындағы Нарыҫтауға сәйәхәт ҡылдыҡ. Пандемия арҡаһында юбилейҙарҙы үткәрә алмағайныҡ, шунда уртаҡ юбилей байрамы ойошторҙоҡ. Күңелдәребеҙ бушағанса аралаштыҡ, бер-беребеҙҙе ҡотланыҡ, бала саҡтағы уйындарҙы уйнаныҡ, ял иттек.

Быйыл иһә Башҡортостан буйлап сәйәхәт ойошторҙоҡ. Иртән Өфөнән автобус менән Торатауға сығып киттек. Себерҙән ҡайтҡан егетебеҙ Рәфис тауға иң текә яғынан менергә тәҡдим итте. Менеп еткәс, "Мин булдырам", "Мин быны эшләй алам", "Беҙ маҡсатҡа өлгәшә алабыҙ, быны өсөн көс-ғәйрәтебеҙ етерлек", "Мин тормошто яратам" тигән иҫ киткес енеү тойғоһо барлыҡҡа килде. Тау түбәһендә күмәкләп фотоға төштөк. Шунда йөрөгән йәштәр беҙгә ҡарап һоҡланыуын белдерҙе.

Тауҙан төшкәс, кафела төшкө аш ашаныҡ та, йырлай-йырлай Красноусолға киттек. Унда ҡуныр өсөн ҡунаҡ йортон алдан һөйләшеп ҡуйғайныҡ. Шифа һыуы Көгөш йылғаһында ҡойоноп алдыҡ та, кис буйы тағы һөйләшеп ултырып, матур итеп аралаштыҡ. Егеттәребеҙ шешлек әҙерләне, ҡымыҙ хәстәрләне.

Иртәнсәк автобус килгәнсе тағы ла һыу инеп алдыҡ. Шифалы һыуын һауыттарыбыҙға тултырып алғас, автобусҡа ултырып, Ғафури районының Сәйетбаба ауылындағы музейға юлландыҡ. Беҙҙе унда көтөп торалар ине. Ҡурай уйнарға өйрәнеү буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәттеләр, аҙаҡ умарталыҡта милли аш-һыу менән һыйландылар. Милли кейемдәр кейеп, аттарға атланып, фотосессия ойошторорға тигән теләгебеҙ ҙә тормошҡа ашырылды. Һәр ҡайһыбыҙ атта йөрөнө. Мин шунда үҙ ғүмеремдә икенсе тапҡыр атҡа атландым. Яңы хистәр беҙҙе тағы ла бала саҡҡа алып ҡайтты. Бала саҡта һалынған дуҫлыҡтың, туғанлыҡтың ныҡ, ҡаҡшамаҫ икәненә инандыҡ. Уның ҡәҙере ологайған саҡта ныҡыраҡ беленә икәнен аңланыҡ.

Алдағы йылда беҙҙең интернат-мәктәптә тамамлауыбыҙға 45 йыл тула. Ҡайтышлай, шул датаны үткәреү планын ҡорҙоҡ. Уртаҡ китап яҙыу идеяһы ла тыуҙы. Ул китапты һәр кем күңеле ҡушҡанса яҙһа, дөрөҫ булыр тибеҙ: кем иҫтәлек, кем хәтирә, кем шиғыр, кем хикәйә яҙасаҡ...

**Донъяла төрлө хәлдәр булып тора, проблемалар ҙа булмай тормай. Бындай саҡтарҙа нисек итеп бер-берегеҙгә ярҙам итәһегеҙ?**

- Пандемия ваҡытында класташыбыҙ Роза Хөрмәт ҡыҙы үҙенең профессиональ кәңәштәре менән ярҙам итте. Ул табип, медицина фәндәре докторы, балалар хирургы. Бер саҡ Әлшәйҙә йәшәгән егетебеҙҙең ҡатыны ныҡ ауырып киткәс, уны Стәрлетамаҡ дауаханаһына һалырға ярҙам иттек. Роза үҙе лә үткәрҙе был ауырыуҙы, тик быны бер кемгә лә һиҙҙермәне. Мин генә белдем. Тағы ла Өфөлә кемгәләр фатир алырға кәрәк булһа, риэлторҙар табышабыҙ, программалар эҙләшәбеҙ, юристарға ебәрәбеҙ, суд эштәрендә адвокаттар менән ярҙам итәбеҙ. Бер ҡыҙыбыҙҙың матди хәле ауыр саҡта аҡсалата ярҙам иттек. Бер-беребеҙҙең балаларыбыҙҙы ла ҡарашабыҙ, ҡулдан килгәнсе хәстәрлек күрһәтәбеҙ. Ҡыш көндәрендә бергәләп театрҙарға ла йөрөйбөҙ. Ошоғаса спектакль премьераларын ҡалдырғаныбыҙ булманы.

Мәктәп-интернатта, әйткәнемсә, туғанлыҡ, дуҫлыҡ хисе ныҡ һалына. Донъялыҡтан иртә китеп барған класс етәксебеҙ Фәүзинә Ҡыям ҡыҙы Үтәголова беҙҙә ошо сифаттарҙы тәрбиәләй алды, тип уйлайым. Һәм беҙ уны һәр саҡ оло хөрмәт менән иҫкә алабыҙ. Ғөмүмән, интернат-мәктәптә уҡытҡан һәр уҡытыусы, һәр тәрбиәсе беҙҙең хәтерҙә иң яҡшы кешеләр булып уйылған.

**Ә үҙегеҙҙең туғандарығыҙ менән нисек аралашып йәшәйһегеҙ?**

- Уҡытыусы булып эшләгән бер һеңлем футбол мәктәбенә

йөрөгән ейәнен ҡарар өсөн Ишембайҙан Өфөгә күсеп килгәйне. Хәҙер бурысын үтәп, кире Ишембайға ҡайтып китте. Уның менән көн һайын хәбәрләшеп торабыҙ. Икенсе һеңлем Малаяҙҙа йәшәй. Оҙаҡ йылдар Янғантауҙа эшләне.



# УРЫНЫБЫҘ

Дүрт бала үҫтерә. Ғүмере буйы инвалид креслоһында ултырған спортсы-марафонсы ирен ҡарай. Илдус ҡустыбыҙ утыҙ йәше тулған көндә үлеп ҡалды. Салауат районында тәфтишсе булып эшләй ине. Бер дауыллы көндә енәйәтселәр уның ғүмерен ҡыйҙы. Уның балаларына ярҙам итеп торабыҙ. Бишенсе һеңлебеҙ Өфөлә йәшәй.

Атайыбыҙ киномеханик булды. Беҙ һәр бер совет киноһын икешәр-өсәр тапҡыр ҡарай инек. Әсәйебеҙ китапханасы булғас, алдыбыҙҙан китап өҙөлмәне. Әсәйем менән атайым араһындағы мөнәсәбәт ғаиләләге идеаль мөнәсәбәт өлгөһө булды. Әсәйебеҙ тушөккә яткас, атайыбыҙ уны ике йыл эргәһенән китмәй ҡараны.

**"Интернатский" тигән һүҙ күп ваҡыт милләт кеүек ҡабул ителә. Мин унда уҡығандарға көнләшеп ҡарайым. Үҙегеҙ ошо атамаға ниндәй баһа бирәһегеҙ?**

- "Интернатский" - сифат тамғаһы. Беҙ интернатта уҡығанда 20-22 ҡыҙ бер бүлмәлә йоҡлай торғайныҡ. Һәр беребеҙҙең характерын, тын алышын белеп бөттөк. Кемдәндер сәс үрергә, кемдәндер предметта өлгәшергә өйрәнһәң, кемдәндер энә менән еп алып тораһың. Шундай аралашыу 9 ай буйына дауам итә. Өҫтәүенә, 10-сы айға интернатты буяп таҙартыу өсөн практикаға ҡала торғайныҡ. Туғанлыҡ хистәре, ысынлап та, бәләкәйҙән һалына. "Интернатский" - ысын туғанлыҡтың юғары маркаһы.

Тағы ла шуны әйтеп китергә кәрәк: интернатта уҡыусыларҙың "Беренселәр" тигән бренд итеп күтәрелгән ойошмаһы бар. Был беҙҙең иң ҙур Ауылыбыҙ. Уларҙың чаты, интернатты тамамлаусылар ассоциацияһы бар. Академик Ғайса Хөсәйенов тәүге сығарылыш уҡыусыһы булған, ул беҙҙең аҡһаҡалыбыҙ ине. Артабанғы быуындар бер-берен белә, таный, аралаша, апай, ағай, туғаным, тип өндәшеп, бер-берен яҡын тартып торалар. Бына әле үҙем эшләгән 158-се

Башҡорт гимназияһында "интернатский"ҙарҙан 6 уҡытыусы эшләй. "Интернатский" милләтенә үҙеңдең баһаңды белеү, белемле булыу, ынтылышлы булыу, мотлаҡ рәүештә бер-береңә ярҙам итеү, бер-береңде яратыу, маҡсатҡа ярашлы эшләй белеү, туған ереңде, халҡыңды, туған телеңде яратыу сифаттары хас. Ғорурланырға сәбәп түгелме ни был!

Беҙҙең башҡорт теле уҡытыусыларыбыҙ иҫ киткес шәп, зыялы, ихтирамға лайыҡ кешеләр була торғайны. Сажидә Хәмәтъяр ҡыҙы Зайлалова һуғыш йылдарында интернатта директор булып эшләгән. Беҙ килгәндә башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән уҡыта ине. Класс етәкселәребеҙ Фәүзәнә Әйүп ҡыҙы менән Фәүзинә Ҡыям ҡыҙынан уңдыҡ! Физкультура уҡытыусыһы Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов беҙҙең өсөн үҙ һөнәренә тоғролоҡ идеалы булды. "Беренселәр" тигән ҙур ауылдың айырым тармағы булған спортсыларҙы тәрбиәләне ул. Куба революцияһында ҡатнашҡан легендар шәхес ине.

**Беҙ донъя кимәлендәге оло сәйәсәттә, финанс корпорацияларында түгел, туғанлыҡта, берҙәмлектә, ошондай рәсми булмаған рухи ауылдарыбыҙ менән көслө. Шулай түгелме?**

- Мин ул турала күп уйланғаным бар. Дөрөҫ фекер. Сөнки 1992 йылда Ишембайҙа Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге гимназияны ойошторғас, коллектив алдына лидерҙар тәрбиәләү маҡсатын ҡуйҙыҡ. Өфөләге башҡорт лицейҙарына ла, гимназияларына ла шундай маҡсат ҡуйыла. Минең Рәсәйҙә, донъя кимәлендә, үҙебеҙҙә бынамын тигән лидер уҡыусыларым бар. Әммә уларҙың күбеһе үҙҙәрен бик үк танытып, белдереп бармай. Улар беҙҙең халыҡ өсөн ҡәҙерле булған ҡиммәттәрҙе баһалап йәшәйҙәр. Ул ҡиммәттәр шулар: берҙәмлек, дуҫлыҡ, туғанлыҡ, булғанынан, Хоҙай биргәндән ҡәнәғәт булып йәшәү.

**Һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа йәшәүсе халыҡтың күпләп ҡалаға ынтылыуы, урбанизация хәрәкәте үтә әүҙемләште. Мәҫәлән, баш ҡаланың Октябрь районына ҡараған Нуғай ҡасабаһындағы мәктәптә быйыл 12 беренсе класс ойоштторғандар. Һеҙ етәкләгән мәктәпкә лә ауылдарҙан яңы килеүселәр барҙыр. Улар ҡала мәктәбенә адаптацияны нисек үтә?**

- Яраҡлашыу ауыр тигән проблема күп осраҡта уйлап сығарыла. Әлбиттә, тәүге мәлдә шок терапияны алған балалар ҙа бар. Әммә хәҙерге заман балаларының адаптация мөмкинлеге сикһеҙ. Балалар яңы шарттарға бик тиҙ өйрәнә. Улар тәүге көндәрҙә генә ҡыйынлыҡ кисерә. Беренсе көндәрҙә күҙҙәрен шар асып йөрөйҙәр. Стенаға терәлеп торғандары ла бар. Һәр береһенең янына килеп, башынан һыйпап, һорашам, танышам. Әгәр ҙә бала унайлы, йылы, яҡты, яғымлы, бәхетле шарттар булдырылған яңы коллективҡа килеп инә икән, ул шундуҡ был ыңғай мөхиткә ылыға. Был күҙ асып йомған арала килеп сыға.

**Ғөмүмән, кеше бәхеткә тиҙ өйрәнәме?**

- Әлбиттә, уңайлы, комфортлы шарт кешене шундуҡ йота. Бының өсөн хафаланырға кәрәкмәйҙер ҙә хатта. Киреһенсә, төпкөлдә күп мөмкинлектәрҙән мәхрүм булған баланы бәхетле шарттарға тиҙерәк урынлаштырырға кәрәк. Һис булмаһа, ауыл мәктәптәрендә шундай шарттар тыуҙырырға кәрәк. Әгәр ҙә мин ауыл мәктәбе директоры булһам, иң алдынғы Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттары менән бәйләнеш булдырыр инем. Беҙ бөгөн Өфөнөң 8 юғары уҡыу йорто менән бәйләнеш ойоштторғанбыҙ. Аҡыллы быҙау ике һыйырҙы имә, тиҙәр. Беҙ иһә, күп һыйырҙы имгән быҙау кеүек йәшәйбеҙ. Баш ҡалала булған барлыҡ мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға тырышабыҙ. Ҡыйынлыҡҡа ғына өйрәнеүе ауыр, рәхәтлеккә кеше тиҙ өйрәнә.

**Ауылығыҙға ниндәй исем бирәһегеҙ?**

- Ул исем күптән бирелгән. Ауылыбыҙ "10"В" - 1977" тип атала. Чатыбыҙ ҙа шул исем менән йөрөй. Ауылыбыҙҙың 3 старостаһы бар: Наилә Имаева, Роза Шәңгәрәева, Флүрә Мурзина, мин - башҡарыусы директор, 3 медсестрабыҙ, 2 халыҡ табибыбыҙ бар.

**Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Гөлназ Ғафир ҡыҙы!**

## *ТЕМАНЫ АУЫЛДАШТАР ДАУАМ ИТӘ:*

***Иҙелман НИҒМӘТУЛЛИН, ветеринар, Мәсетле районында йәшәй:*** Беҙҙең класс иң көслө, иң ойошҡан класс булды. Мәктәптә үткән КВН-дарҙа һәр ваҡыт еңеп сыға торғайныҡ. Ете класташыбыҙ мәктәпте алтын миҙалға тамамланы. Берәребеҙҙең тормошонда ауыр хәл, проблема килеп тыуһа, мәғлүмәт килеп етеү менән шундуҡ ойошабыҙ ҙа, ул класташыбыҙға ярҙамлашырға тотонабыҙ. Һуңғы йылдарҙа, үкенескә күрә, һирәгәйә лә башланыҡ, шуныһы йәл. Йыл һайын осрашыуҙарҙы оло түҙемһеҙлек менән көтөп алам, тулҡынланып барам.

***Флүрә МУРЗИНА, Башҡортостан телевидениеһы дикторы, Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларының атҡаҙанған хеҙмәткәре, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Өфөлә йәшәй:*** Беҙҙең класс башҡаларға оҡшамаған, сөнки класташтарымдың һәр береһе үҙенсәлекле шәхес. Сәмләнә лә белә улар. Уҡыу буйынсамы, физик әҙерлектәме, кластан тыш сараларҙамы - беҙ һәр урында ла алдынғы булырға тейеш инек. Ул саҡта мәктәптә социалистик ярыш ойошторола ине. Күп ваҡыт еңеүсе вымпелы беҙҙең класс бүлмәһендә эленеп торҙо. Егеттәребеҙ һайлам уктай, береһенән-береһе һомғолораҡ, көслөрәк инеләр. Улар араһында Илдар Латыпов та булды. Бөтә донъяға билдәле офтальмолог Федоровта уҡып, Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында эшләне. Уның хаҡында билдәле офтальмолог Марат Аҙнабаев: "Мин уның менән Америкаға, Канадаға барырға ярата. Сөнки Илдар инглиз телендә еңел аралаша", - ти ине. Иҙелман Ниғмәтуллин Ҡаҙанда ветеринарға уҡыны, хәҙер тыуған яғында йәшәй. Хәрби класташыбыҙ Мәрүән Мөхәмәҙиев Германияла хеҙмәт итте. Хәмит Ҡунаҡколов Мәләүеҙлә училище директоры булып эшләне. Рәхимйән Исәнғолов ауыл хужалығы институтында уҡыны, гитарала, ҡурайҙа уйнай. Яҡташым Фуат Шафиҡов пединститутта физика-математика факультетында уҡып сығып, оҙаҡ йылдар Благовещен ҡалаһында мәктәп директоры булып эшләне. Вилсан Өмөтбаевҡа килгәндә, ул уҡыған сағында уҡ медбрат булып эшләп, һуңынан мединститут тамамланы. Әле ауылында 90 йәшлек әсәһен ҡарап йәшәй.

Мин класыбыҙҙа Гөлназ менән ярышып уҡыным. Ул беҙҙең комсорг булды. Бер мәл икебеҙ таҡтаға сығып, физиканан бер үк мәсьәләне ике төрлө ысул менән сисеп, бер үк яуапты сығарыҡ, шул иҫемдә ҡалған. Минең иң яратҡан уҡытыусым физика фәненән Мәхтүмә Ислам ҡыҙы Яхина булды.

***Роза ШӘҢГӘРӘЕВА, медицина фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт медицина университетының балалар хирургияһы кафедраһы мөдире, профессор, Өфөлә йәшәй:*** Бик татыу класташтар булдыҡ, әле лә шул сифатыбыҙҙы юғалтманыҡ. Ҡайһы бер кластар төркөмдәргә бүленә, беҙ иһә бер йоҙроҡҡа тупланғандай йәшәйбеҙ. Бер бөтөн, бер ауыл кеүекбеҙ. Класыбыҙҙа лидерҙар күп булды, әлеге ваҡытта Гөлназ Ғафир ҡыҙы беҙҙе үҙ янына туплай.

***Азамат ҒӘБИҘУЛЛИН, иҡтисадсы, Бөрйән районында йәшәй:*** Беҙҙең класты гвардия класы тип йөрөттөләр. Мәктәп директорының тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Вил Шәйҙулла улы: "Гвардеецтарға сәләм!" - тип класыбыҙға килеп инә торғайны. Бөтән яҡлап алдыра инек. Үҙем ауыл хужалығы институтының иҡтисад факультетын тамамланым. Хәҙер пенсияламын. Әгәр ҙә Башҡортостандың бер буш яткан еренә барып, беҙҙең класҡа ауыл һалырға ҡушһалар, ул ауыл сәскә атыр, йәнебеҙ ял иткән ауылға әүерелер ине. Ултырған урынына ҡарап, шөғөлөн дә табыр инек. Гөлназ Ғафир ҡыҙы ул ауылдың старостаһы йә мәктәп директоры булыр ине. Иҙелман мал ҡараһа, Флүрә ауылыбыҙ радиосельтәрендә диктор булып эшләр ине. Роза докторыбыҙ беҙҙе бағыр ине. Мин инде, ышанып тапшырһалар, ауылдың иҡтисад мәсьәләләрен хәл итер инем.

***Гөлзаһира АРЫҪЛАНБАЕВА, паспорт бүлеге хеҙмәткәре, Өфөлә йәшәй:*** Иң юғары баһа бирерлек класс инек беҙ. Әлеге көндә лә класыбыҙҙың бер ауыл булып аралашып, араларҙы өҙмәй йәшәүебеҙ татыулығыбыҙ хаҡында һөйләй. Үҙем Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамланым, 1981 йылдан алып бөгөнгә тиклем шул уҡыу йортоноң паспорт өҫтәлендә эшләйем.

***Фаягөл ҒИБАҘУЛЛИНА, Өфөлә йәшәй:*** Мин интернат-мәктәпкә Белорет районының Ғәбдүк ауылынан килгәйнем. Шундай матур, яҡшы класҡа эләктем. Класташтарым барыһы ла тормошта үҙ юлын табып, уңышлы кеше булып йәшәй. Кем белә, бәлки улар фәҡәт ошо класҡа эләкмәгән булһалар, тормоштары бөтөнләй башҡаса булыр ине.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бер көн ҡулына "Ағиҙел" журналы килеп эләкте. Күрәһең, уға тиклем дә бер башҡорт ултырған. Хатта ҡыуанды ул журналға. Башҡортса бит! Туғаның, ауылдашың менән осрашҡан кеүек булып китте. Тауышы сыҡмаһа ла, теле бар.***




Улар оло эш бөтөргән ҡиәфәттә тышҡа сығып киттеләр. Бөгөн артыҡ ҙур эш булмаҫтыр, митингыға килеүселәр таралышҡан, бола бөткән.

...Мәснәүи камераға бикләүҙәре менән тимер ишекте типкеләргә тотондо:

- Ах, мин сезне!.. Чыгыйм гына әле, жиде буын аналарыгызның жиде йөз житмеш жиде ел яткан кабер такталарын... Бөтен токым-затларыгыз белән! Башым Себер китсә китәр, чукындырмый калмам! Сволочь, мөртәт, үзе татар бит әле! Чукынган татар! Жүнле адәм милициядә эшлиме! Ә мин шушыларга азатлык алып бирәм дип йөргән булам! Ничего, чыгыйм гына әле, төсеңне танырмын мин синең! - Ул һүгенде-һүгенде лә тағы типкеләргә, дөбөрләтергә тотондо. Тыштан кемдер: "Эй, ты там, еще надо что ли!" - тип екергәс, стена буйындағы тар һәндерәгә барып ятты. Үҙе эстән генә: "Ныу, теге башкортка нык эләкте! Анысы шәп булды да ул!" - тип бер аҙ үсен ҡандырып, ҡәнәғәтлек кисерҙе.

Мәснәүи татар шулай дыуланы, ә Ишмырҙа башҡорт бая ауған килеш бетон иҙәндә ята бирҙе. Камера һалҡын, кейемдәр еүеш - тышта октябрь, ямғыр ине. Әммә унда ҡайғы юҡ, бетон һалҡынлығы ла беленмәй. Утыҙға ла етмәгән урҙалай егет үҙенең ҡасан илағанын да онотоп бөткәйне, бына күҙҙән йәш аға шикелле, танау мыш-мыш килә, тамаҡ төбөнә ҡаты төйөр ултырған.

Ишмырҙа туҡмалыуҙан да, тәндәре һыҙланыуҙан да түгел, ә гәрлегенән илай ине. Илауын иламай, тештәрен генә ҡыҫа. Ошо көүҙән, ошо ғәйрәтең менән шул манҡаларҙан туҡмалып торсо! Иректә тура килһә, бер ниндәй ҡоралһыҙ-ниһеҙ уларҙың унауһын әйләндерер һала ла инде! Юҡҡа ғына өйрәттеләрме ни армияла! Атайың туҡмаһа йә армияла "дед"тар бәргеләһә, әллә ни гәрлеге юҡ. Атайың инде тейеше өсөн бирә, "дед"тар үҙҙәренде яҡлай алмағанға мыҫҡыллай. Ә былар? Манҡа мильтондар! Аңғармағандараҡ эләктереп алдылар шул. Баймаҡта бәйләнһендәр ине үҙенә!

Их, кисә генә бөтөнләй икенсе донъя ине! Ишмырҙа бит үҙен ауылда ғына түгел, донъяла хужа итеп тоя. Ни теләй, шуны эшләй, ҡайҙа кәрәк, шунда сыға ла китә! Ана, килеп әйттеләр, Өфөгә барырға, тип, ултырҙы ла китте. Гел уның кеүек көслө, ғәйрәтле егеттәр йыйылған. Өрәны матур автобус бирҙеләр - баймаҡтар ҙа инде улар! Автобус алдына Зәки Вәлидиҙең йәшелле-күкле әләмен ҡаҙанылар. Ирәндеккә етеү менән йырлап та ебәрҙеләр:

Башҡорттар китте һуғышҡа, Оҙатып ҡалды күк Урал. Ат уйнатып алдан бара Шайморатов генерал.

Күңелле барҙылар, күмәк булғас, ҡыҙып та алғас, оҙон юл да бик ҡыҫҡа күренде. Өфөгә иртән һигеҙҙә үк килеп еттеләр. Депутаттар йыйылып һөйләшә торған ҙур һарайҙың алдына халыҡ тулған. Төрлө-төрлө флагтар, лозунгылар яҙылған таяҡтар тотҡандар. Күпселеге Ишмырҙа кеүек йәштәр. Депутаттар үткән һайын ҡысҡырып ҡалалар: "Суверенитет!", "Башҡортостан!", "Азатлыҡ!" Башҡорто - башҡортса, русы - русса, татары татарса ҡысҡыра. Мәрәкә инде, былдайҙы күреү түгел, ишеткән дә юҡ. Халыҡ дыу килә, береһен дә тотоп алып китмәйҙәр, шуғалыр, тағы ла нығыраҡ һөрәнләйҙәр. Әйтерһең, ҡараңғыла бикләп тотҡандар ҙа ҡапыл яҡтыға сығарғандар, шунан былар нишләргә белмәй ҡаңғырыша.

Бында ҡыҙыҡ бөткәс, майҙанға барып, митинг яһанылар. Һөйләнеләр, ҡысҡырҙылар, һыҙғырҙылар. Береһе һөйләгәнде икенсеһе ишетмәне, тыңларға ирек бирмәне. Ишмырҙа ла ҡысҡырҙы: "Азатлыҡ!", "Долой!", "Отставка!" Уның тауышы шәп, әллә ҡайҙарға китә. Әйҙә, ҡысҡырып ҡалһын, ҡасан тура килә әле былдай эш. Ҡайтҡас, ҡыҙыҡ итеп һөйләр. Төнгә тиклем йөрөрҙәр ине лә, ямғыр яуа бит. Автобустарына инеп, "йылынғылап" алдылар. Уныһын да күреүсе, тыйыусы булманы. Хәйер, хәҙер хөрриәт, демократия, тиҙәр.

Эш һәйбәт кенә бара ине шулай, әллә ҡайҙан бынау Мәснәүи тигән бәндәһе килеп сыҡты. Янына килде лә һөйләнә башланы: "Башкортлар килгән, фәлән-төгән..." Эсеп тә алған. Ишмырҙаның йөне көйҙө лә китте. Ул да ҡыҙмаса бит инде. "Килһә, нимә булған!" - тине. Шунан әрепләшеп киттеләр, әллә ни арала яғаларынан эләктерештеләр. Кем башлағанын да белерлек түгел. Ярай һуғыша башламанылар. Ишмырҙалағы көс - бер һуғыуҙа аҫау айғырҙы үлтерә лә инде! Ул арала арттан килеп ҡайырып алдылар ҙа машинаға илтте лә тыҡтылар. Былар хатта аңғармай ҙа ҡалды. Милиция-фәлән күренгән кеүек тә түгел ине, шуға үҙҙәре лә иркен ҡыланды. Әллә былай кейем кейеп йөрөгәндәр, әллә Ишмырҙа кеүектәрҙе һағалап торғандар. Илтеп тыҡтылар ҙа милицияға алып та киттеләр. Быны һиңә демократия! Ишмырҙа һөйләнеп маташҡайны ла, екереп кенә ҡуйҙылар.

Машинанан төшкәс, икеһе бер булып, милиция менән айҡашыуын айҡаштылар инде. Нинә көпә-көндөҙ ерле юҡҡа былларҙан мыҫҡыл ителеп торорға! Шунан инде ҡулдарына бығау һалдылар ҙа кинәнгәнсе бирҙеләр. Быны хәҙер ята иҙәндә...

Иптәштәре ҡайтып киттеме икән инде? Әллә һаман йөрөйҙәрме икән? Ташлап китмәҫтәр, баймаҡтар ҙа инде улар! Ишмырҙаны нисек сығарырға тип юллап йөрөйҙәрҙер әле. МВД-ла үҙҙәренең районынан бер башҡорт майоры эшләй, тиҙер ине, шуны эҙләйҙәрҙер. Бөгөн табыуын таба алмаҫтарҙыр, хәҙер һуң инде, моғайын, иртәгә килерҙәр. Майор булғас, әйттереһә, сығаралар ҙа ебәрәләр инде. Әрләүен әҙерәк әрләрҙәр, ныу штраф һалһындар, ти! Ерунда!..

Ҡатыны Нәзифә, барма, йөрөмә шунда, тип күпме ялынғайны. "Горбачев яһай алмаған перестройканы һин яһармын тиһеңме! Әллә ниндәй бәләләргә ҡалып ҡуйырһың!" - тине. "Ҡалмабыҙ! - тине Ишмырҙа. - Хәҙер застой замана түгел, хөкүмәт үҙе беҙҙең кеүектәрҙән ҡурҡып тора!" Балаларға кейем, күстәнәс апҡайтырмын тип, аҡса ла алғайны. Алдың! Кеҫәләре буп-буш. Әй, аҡсаһы суҡынып китһен дә, нисек тә тиҙерәк сығып ысҡынырға ине.

Ғүмерҙә лә бик эсендә ултырғаны юҡ уның. Нәҫел-нәсәбендә булған эш түгел. Хәтәр икән дә! Әле һаман ышанып етмәй, бөтәһе лә яңылыштыр, бәлки, төш кенәлер, ул ауылында, өйөндә яталыр һымаҡ. Шуға ышанып ҡыбырлап ала. Ҡыбырланымы, ҡулы һалҡын бетонға тейә, күҙен астымы, бейектә янған тоноҡ ҡына шәм күренә. Тәҙрә лә, ишек тә юҡ. Ишеге бар ҙа, асылмай. Күңел жыулай ҙа китә. Нисек төндө үткәрергә? Тиҙерәк яҡтырһын ине. Яҡтырһын да теге майор килеп алып китһен үҙен. Ай, оҙаҡ үтә ваҡыт!..

* * *

Ә эш Ишмырҙа уйлағанса ғына түгел ине. Теге ерән капитан Кальметов менән Буранбаевтан тағы бер тапҡыр һорау алды ла, шунан Гоголь урамы төбөндәге төрмәгә илттеләр ҙә яптылар. Төрмә тигәс тә, ысын төрмә түгел икән был, халыҡ белмәйенсә генә шулай әйтә, имеш. Бында уны "изолятор" тип йөрөтәләр. Судка тиклем ултырғандарҙы шунда тоталар икән. Ишмырҙаның тыштан ғына ҡарап үткәне бар ине, быны эсен дә күрергә тура килде. Тимәк, эш ҙурға китте.

Бында эштәр хәтәр: сығармайҙар ҙа, эш тә эшләтмәйҙәр, бикле тик тоталар. Камераның эсе тулы гел бер төҫлө халыҡ, хәс тә йөнө туналған һарыҡтар. Саҡыртһалар, һорау алыу өсөн генә килеп алалар. Унда ла ҡулдарын артҡа ҡуйҙырып, һаҡ аҫтында ғына килтерәләр. Шул ҡиәфәттә алып китәләр. Ошоноһо бигерәк гәрлек. Тиҙерәк хөкөм итеп ҡуйһындар ҙа инде... Нимәһенә кешенең башын ҡаңғыртырға!

Ишмырҙа суд көнөнә тиклем өмөттә торҙо. Моғайын, был килеш ҡалдырмаҫтар уны, колхоз председателе менән райком секретары килеп йолоп алыр. Бик өлгөлө кеше, колхозға кәрәк кеше, тиерҙәр, уныһыҙ эш бармай, тиерҙәр. Райком секретары уны белергә тейеш, Ишмырҙаны бит бер түгел, ике тапҡыр район газетаһында маҡтап яҙҙылар. Председатель дә, райком секретары ла төрмә начальнигы менән генә түгел, хатта министрҙың үҙе менән дә һөйләшә ала.

Ишмырҙа шулай коридорҙа аяҡ тауышы ишетелгән, шалтырап ишек асылған һайын тилмереп көттө. Һорау алырға тиҙерәк саҡырғандарын көттө. Барып инеү менән следователь: "Буранбаев, һинең эшең туктала, бар, ҡайтып кит тә эшеңә тотон", - тип әйтер һымаҡ ине. Юҡ, булманы, хыянат иттеләр. Айҙан ашыу ултыра, председатель түгел, иптәштәре лә килеп күренмәне, хатта күстәнәс тә ебәрмәнеләр. Ишмырҙа үҙе булһамы, төрмә нигеҙен ҡаҙып булһа ла килеп инер ине. Бөтә кеше лә уның кеүек түгел икән шул! Һай, "ашап-эскәндә дуҫтар күп, башыңа бәлә төшһә, береһе лә юҡ", тип юҡҡа йырламағандарҙыр борон-борондан. Ә ул ана шулар өсөн ғазап сигеп ултыра, ахмаҡ!

Аптырағас, Ишмырҙа үҙен үҙе йыуатып ала. Урлашып йә кеше талап ултырмаған да инде, башҡортомдоң ирекле тормошо өсөн, тип йөрөгән. Ана, Ленин менән Сталин, Дзержинскийҙар ҙа ултырған. Бер генә тапҡыр түгел, әллә нисәмә рәт ултырып сыҡҡандар. Барыбер сыҡҡандар. Ниндәй ҙә кеше булып киткәндәр. Бәлки, берәй заман Ишмырҙа Буранбаев тураһында ла шулай һөйләп йөрөрҙәр, хатта китапҡа ла яҙырҙар. Хәҙер түгел инде, берәй заман, үҙе үлгәс. Башҡорттоң азатлығы өсөн ултырған төрмәлә, үҙе теге Буранбай нәҫеленән булған, тиерҙәр. Килештерерҙәр, өҫтәп-өҫтәп яҙырҙар...

Ә теге татар бирешмәйҙер әле, Өфө кешеһе бит. Әллә кемдәре барҙыр, милицияла бит, ҡайҙа ҡарама, татарҙар ултыра. Иллә шәп иттеләр үҙен, нык бирҙеләр тегегә! Югиһә, әллә кем булып йөрөй ине! Айырманылар инде, икеһенә лә бер сама эләктерҙеләр.

Нишләп шул милиция тигән ерендә башҡорттар эшләмәй икән? Быны ошондай ваҡытта кәрәк бит улар. Ят - ярлыҡамай, үҙеңдеке - үлтермәй, тигәндәр. Ишмырҙа үҙе шул тирәлә йөрөһәме, бөтә башҡорттарға ярҙам итеп ултырыр ине...

Ишмырҙа Буранбаев ниндәй генә хыялдарға бирелмәһен, берһә лә ысынға сыҡманы: ике ай изоляторҙа тоттолар ҙа шартлатып хөкөм иттеләр ҙә ҡуйҙылар. Судта суверенитет-фәлән тураһында һүҙ булманы, уголовный енәйәт тип таптылар. Баштараҡ Ишмырҙа, бәлки, үҙҙәрен политик тотҡон итерҙәр, тип өмөтләнгәйне, унда шарттар һәйбәтерәк була, арыуыраҡ ашаталар ҙа, имеш, тиҙәр ине, улай яһаманылар, йәмәғәт тәртибен боҙған, милицияға ҡул күтәргән өсөн, тип сығарҙылар хөкөмдө. Ярай, бәлки, хәйерлегә булғандыр, политика өсөн дә оҙаҡҡа ябырҙар, йә каторгаға уҡ ебәреп ҡуйырҙар ине. Ә былай ике йыл бирҙеләр ҙә холоҡ төҙәтеү һәм хеҙмәт лагерына яптылар.

Теге Мәснәүи татар менән башҡаса күрешмәнеләр, күрәһең, икеһен ике яҡҡа олаҡтырҙылар.

## 2

Колония тигәндәре изоляторҙан алдынығраҡ икән дә: арыуыраҡ ашаталар, эшләтәләр, һарайҙан ялан кәртәгә сыҡҡан мал шикелле, шул ихата алдына сығып йөрөп тә була. Хат яҙырға ла рөхсәт бар, хатта кино ла күрһәтәләр икән.

Иң ҡотҡарғаны эш инде. Югиһә, изоляторҙа саҡта аҫылынып ҡына үлерҙәй булды ла баһа! Бер ни генә лә ҡылыр әмәл юҡ: ятаһың һаҫыҡ камерала һуҡыр сысҡанға оҡшап. Бында, исмаһам, кеше итеп тояһың үҙеңде.

Ишмырҙалар мясорубка яһай. Цехы ла ошонда кәртә эсендә икән, көн дә һанап, ҡарап үткәрәләр. Бер завод һымаҡ үҙенсә. Ишмырҙа ни, тимер-томор араһында йөрөгән кеше, формовкаһына ла, станогына ла тиҙ өйрәнде. Аҙна-ун көн тигәндә, ҡуйылған нормаларын тултыра, тағы бер аҙҙан арттырып та ебәрә башланы. Эшләгәнде ни бында ла яраталар.

Шуныһы ғына яман: мясорубкаһы әҙер булдымы, билмән ашағы килә лә китә. Өйҙә саҡтар, ит әйләндергән, күмәкләп ултырып билмән яһаған, шунан ошо билмәнде алҡынғансы ашаған ваҡыттар күҙ алдына килә. Аш аллығы ла була торғайны. Ашап туйғас, күмәкләп ултырып телевизор ҡарайҙар, шунан балалары йоҡлап киткәс, кәләшенең эҫе тәненә һырығып, юрған аҫтына сума...

Булған бит замандар! Хәҙер хатта ышанғы ла килмәй. Ныу, сығып алһа, белер ине ҡәҙерен. Былдағы ашты бит улар эттәренә лә бирмәй торғайны. Ысын! Ундай ашты күргәне юҡ ғүмерҙә лә.

Ни хәл итәһең, килеп эләккәс, түҙергә генә ҡала, башҡа әмәле юҡ.

Ярар, быны шулай әйткәндәрен тыңлап, ҡушҡандарын эшләп, шым ғына көн күреп ята әле. Өҫтәүенә, бер шөғөл дә табып алды. Бер көн ҡулына "Агиҙел" журналы килеп эләкте. Күрәһең, уға тиклем дә бер башҡорт ултырған. Сыҡҡанда ҡалдырып киткәндер. Хатта ҡыуанды ул журналға. Башҡортса бит! Туғаның, ауылдашың менән осрашҡан кеүек булып китте. Тауышы сыҡмаһа ла, теле бар.

**(Дауамы. Башы 38-се һанда).**

✓ *Әле бына концерт-театр берекмәһенең үҙ профессиональ оркестрын төҙөү менән мәшғүлбеҙ. Ул беҙҙең музыкаль яҡтан ихтыяждарыбыҙҙы тормошҡа ашырасаҡ.*



*АФАРИН!*

# ЫШАНЫС БАРҘА...

## хәүеф юҡҡа сыға

**Илдә, илдә генә түгел, планета буйынса барған хәүеф бер кемде лә урап үтмәне. Ул әле лә дауам итә. Әммә яңы шарттарҙа йәшәргә, төшөнкөлөккә бирелмәскә өйрәнергә кәрәк беҙгә. Иҡтисади ауырлыҡтарҙы еңеп өйрәнгәнбеҙ, тик аҡса яғы кеҫәгә һуҡҡанда рухиәтте нисек һаҡларға? Ошо һорау Урал аръяғының мәҙәни үҙәктәренә әйләнгән А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры һәм Сибай концерт-театр берекмәһе вәкилдәренә йүнәлтелде. Улар бөгөнгө шарттарҙа нисек йәшәй, яңы миҙгелгә әҙерлектәре нисек - ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирергә ниәтебеҙ.**



***Сибай концерт-театр берекмәһе директоры Юнир КӘЛИМУЛЛИН һөйләй:*** Республика көнөн байрам иткәндә реконструкцияланған яңы бинала матур итеп яңы миҙгелде башларбыҙ, тип өмөтләнәбеҙ. Ул ҙур концерт менән асыласаҡ, тип торабыҙ.

Артабанғы пландарға килгәндә, беҙҙең коллективтың үҙенә генә хас йөҙө барлығын һәр кем белә һәм юғары баһалай, беҙ уны һаҡлаясаҡбыҙ. Беҙҙең балаларҙан башлап оло йәштәгеләргә тиклемге үҙ тамашасыбыҙ бар. Улар беҙҙән яңылыҡтар, хатта мөғжизәләр көтә икәнен беләбеҙ, һәм ул мөғжизәне беҙ тыуҙырырға тейеш.

Әле бына концерт-театр берекмәһенең үҙ профессиональ оркестрын төҙөү менән мәшғүлбеҙ. Ул беҙҙең музыкаль яҡтан ихтыяждарыбыҙҙы тормошҡа ашырасаҡ. Оркестр өсөн профессиональ музыканттарҙы бөтә республика буйлап эҙләйбеҙ. Профессиональ концерт берекмәһе нигеҙе академизм булһа ла, асылыбыҙҙа - үҙебеҙҙең урындағы фольклор, халыҡсанлыҡ бит. Әммә фольклор ҙа академик кимәлдә булырға тейеш. Боронғолоҡтан ҡотола алмаған үткән быуат кешеләре итеп баһаламаһындар өсөн халҡыбыҙҙың музыкаль яҡтан бик тә грамоталы икәнен күрһәтергә кәрәк. Сәнғәтебеҙгә фольклор нигеҙ һалған, эйе, беҙ был хәҡиҡәттән китә лә, ҡотола ла алмайбыҙ, ул беҙҙең ҡаныбыҙға һеңгән. Менталитетыбыҙ шундай. Әммә академик фольклор тигән төшөнсә барын да онотмайыҡ. Музыкаль оркестрыбыҙ тап ошондай юғары кимәлде көүҙәләндерәсәк тә инде. Хореография буйынса ансамблебеҙҙе лә тулыландырҙыҡ. Беҙҙең менән бер берекмәлә, бер ҡыйыҡ аҫтында эшләйәсәк "Сулпан" театрына ла, вокалистарға ла, бейеүселәргә лә, музыканттарға ла мөғәмәлә бер үк - туғандарса. Туғандар бер ҡыйыҡ аҫтына тупланһа, мөмкинлектәр ҙә артыр, дәрәләр ҙә киңәйер, тигән өмөттәбеҙ.

Йәше буйынса коллективыбыҙ республикала иң йәштәр иҫәбендә - 30 йәш. Филармония эргәһендә хореография буйынса балалар студияһы астыҡ. Киләсәк өсөн кадрҙарҙы ла, тамашасыларҙы ла үҙебеҙ әҙерләй башлаясаҡбыҙ. Балаларҙы әле үк концерт номерҙарына йәлеп итәбеҙ. Вокал студияһында йырсылар үҫә. Урал аръяғының мәҙәни үҙәге булараҡ, төп маҡсатыбыҙ йондоҙҙар балҡытыу ғына түгел, халыҡ һөйөүен яулау. Бер мәҙәни ҡаҙанда ҡайнайбыҙ икән, беҙ халҡыбыҙҙың рухи ихтыяжын дөрөҫ ҡәнәғәтләндерергә тейеш. Шул саҡта рухиәт көрсөгөнә юл ҡуйылмаҫ, тигән өмөттәбеҙ.

***Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының әҙәби-драма бүлеге етәксеһе Гөлсәсәк ТЛӘҮСИНА һөйләй:*** Былтыр пандемия башланғас, өйҙә ултырыу биш айға һуҙылды. Шул ваҡытта яңы шарттарға ҡулайлашырға, тамашасыларыбыҙҙан өҙөлмәҫ өсөн онлайн рәүештә архивлаштырылған спектаклдәрҙе күрһәтеүҙе ойоштороуға тура килде. Тәүге онлайн тапшырыу Кәбир Аҡбаштың "Йәшлегем тирәктәре" әҫәре буйынса булды. Урындағы телевидение беҙгә ныҡ ярҙам итте. Тура эфир аша күрһәтелгәнгә, онлайн тамашасыларыбыҙ һаны артты. Тамашасылар менән ғәҙәти булмаған эш шулай башланды. Архивлаштырылған спектаклдәрҙе күрһәтеү күп нәмәне яңынан иҫкә төшөрҙө. Аҙаҡ артистарыбыҙ тура эфир аша кис йоҡлар алдынан балалар өсөн әкиәттәр һөйләүҙе ойошторҙо. Тамашасылар менән тере бәйләнеш барлыҡҡа килде. Былай ваҡытта бит тамашасы театрға килеп, спектаклде ҡарай ҙа ҡайта, нindәй тәьҫораттар алғанын әйтеп тормай. Ә был осраҡта улар комментарийҙарын индивидуаль рәүештә яҙа. Насар яҡтан бер нәмә лә ишетмәнек, Аллаһҡа шөкөр. Нисек кенә сәйер булмаһын, пандемия осоро беҙгә тамашасы менән бәйләнеште нығытырға ярҙам итте. Улар менән театрҙа осраша алмаһаҡ та, эпидемиологик шарттарҙы иҫәпкә алып, репетицияларҙы дауам иттек, премьералар сығарҙыҡ. Тамашасы һаны кәмеһә лә, уларҙы юғалтмаҫҡа тырыштыҡ.

Ысынлап та, үткән ижад миҙгеле бик ауыр осор булды. Мәкерле сир арҡаһында Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Марс Итбаев һәм Арсен Шәйхисламов арабыҙҙан китте. Беҙ уларҙы юҡһынабыҙ, мәңге онотмабыҙ.

Юбилей миҙгелендә күп кенә премьералар яңғыраны - төрлө жанрлы сәхнә әҫәрҙәре донъя күрҙе. Классик әҫәрҙәрҙән М.Фәйзиҙең "Аҡ ҡалфаҡ" драмаһы, яңы тарихи әҫәрҙәрҙән - Н.Ғәйетбаевтың "Муса Мортазин" пьесаһы буйынса "Урал Бөркөтө" драма фаразы, Ф.Бүләковтың легендар "Шаймуратов-генерал" драма-реквиемы сәхнәгә сыҡты. Электән театрыбыҙ бик күп драматургтарға үҙҙәрен асыу өсөн ижад бишеге булды. Беҙҙән күп авторҙар театр тормошона башлап аяҡ баҫты. Шул иҫәптән йәш яҙыусылар - Шәүрә Шәкүрованың "Зәңгәр томандар артында" пьесаһы сәхнәләштерелде, Баныу Ҡаһарманованың бына инде икенсе әҫәре сәхнәгә аяҡ баҫасаҡ. Пандемияның иң ҡыҙыу осоронда сыҡҡан "Их, йәшәүҙәре рәхәт!.." комедияһы тамашасыларҙың кәйефтәрен күтәреүгә, ауырлыҡтарға бирешмәҫкә, яҡшы хыялдарға юл асырға ярҙам итә. Ул спектакль шау-гөр килеп, әленән-әле гастролдәрҙән ҡайтышмай.

Яңы миҙгелгә әҙербеҙ. Ул үткән миҙгел премьералары менән башланды. Ошо көндәрҙә абруйлы театрыбыҙҙың 90 йыллыҡ юбилейына арналған театрлаштырылған тамаша үтәсәк. 1931 йылда художество етәксеһе Арыҫлан Мөбәрәков булған театрҙың башланғысына әйләнеп ҡайтып, бөтөн тарихи ваҡиғаларҙы барлап сығасаҡбыҙ. Был тамаша бик бай, сағыу булыр тип ышанабыҙ. Театрыбыҙ традицияларына шул хәтлем тоғро ҡала килә. Оло быуын артистарыбыҙ арҡаһында элекке йолаларыбыҙҙы һаҡлап киләбеҙ. Әле коллективтың дөйөм кәйефе күтәренке, ауырлыҡтар беҙҙе ҡаушатманы, киреһенсә, ойоштороҙо, күп мәсьәләләргә яңыса ҡарарға өйрәтте.

Осраҡ менән файҙаланып, Өфө халҡын һәм ҡунаҡтарын 15 октябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залына Башҡортостандың атҡаҙанған артисы А. Салауатовтың юбилей кисәһенә саҡырабыҙ, сарала бик күп сәхнә йондоҙҙары һәм бөтә театрыбыҙ артистары ҡатнашасаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Рухиәт өсөн еңел булмаған осорҙа Сибай мәҙәни үҙәктәренән зарланыу ишетмәнек. Был үҙе үк тотороҡлолоҡҡа ишара түгелме? Миҙгелдәр килер ҙә үтеп тә китер. Рухи аҙыҡҡа таңһығыбыҙ ҡанһа, беҙ уларға рәхмәтле булырбыҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

*СӘХИФӘНӘН*



# КИТАП БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ

**"Китап һатып алмайым мин. Интернет селтәрендә барыһы ла бар хәҙер, зауығыңа ҡарап, шиғырын да, повесть-хикәйәләрҙе лә табып уҡып була..." Берәүҙән ошондай фекер ишетергә тура килде. Нимә тип яуап бирергә белмәнем, тиһәм, дөрөҫ булмаҫ. Яуап итеп үҙ фекеремде белдерергә теләмәнем. Сөнки кешенең йәше лә арыу, үҙ фекере күптән формалашҡан. Кирегә тукмәстереү мөмкин булмаған осраҡ. Шулай ҙа, уйланып йөрөп, сәхифәмә булһа ла яҙып һалырға булдым.**

Эйе, виртуаль донъянан бөтә мәғлүмәт табырлыҡ заманда йәшәйбеҙ. Зыянынан файҙаһы күберәк ул, ни тиһәң дә. Замана менән аҙымдашбыҙ күбебеҙ. Социаль селтәрҙәң төрлөһөндә теркәлгәнбеҙ. Күп халыҡ унда әллә ни фекер белдереп бармаһа ла, был донъяла йыш ҡунаҡ. Инеп, әҫәрҙәр уҡып сығыуға, башҡаларҙы күҙәтеүгә ҡайтып ҡалалыр уларҙың бында ҡатнашлығы, тип уйлайым. Быны һис кенә лә хилафлыҡҡа һанамайым, әлбиттә.

Тик бына нимә бит әле... Ул "селтәр" тигән нәмә юҡҡа ғына шулай аталмаған бит инде. Уҡыған әҫәр шундуҡ сикһеҙ тишек-тошоҡҡа һөҙөлөп инеп юғала ла ҡуя. Һаҡлап ҡалмаһаң инде. Берәй килеп, ҡайҙа, ҡабат уҡып сығайым әле, тип төртөлһәң - юҡ. Этләнеп эҙләп ултырыу миңең эшем түгел. Ә китап! Китап бит ул - тере. Ҡул аҫтында ғына. Ана, анауында, кәштәлә генә ята. Ҡулыңа алып һыйпайһың да, ҡыштырлатып биттәрен асаһың. Яңы китаптың үҙенә генә хас еҫе булған кеүек, оло йәштәгеләренең дә тарих еле һалып ҡалдырған айырым, әүрәткес кенә еҫе була. Виртуаль китапҡа күҙҙәреңде текләп, хәреф сүпләүҙән мең тапҡырға артыҡ бит ул тере китап буйлап сәйәхәт итеү.

Яҡшы китаптарҙы, һатыуға сыҡҡан мәлендә алып ҡалмаһаң, бөтә лә китә, етмәһә. Әҫәрен электрон вариантында уҡыным бит, тип, баҫылып сыҡҡан китабын алмай йөрөнөң дә, ти. Бер нисә йылдан, их, шул китапты табыр кәрәк ине, тигән уй киләсәк башығыҙға. Мотлаҡ киләсәк.

Бер ун йыл элек, Башҡортостан тарихына (дөрөҫләнгән, ысын тарихына), ғөмүмән, асылымдың башҡортлоҡ, аҫабалыҡ тигән яҡына әллә ни әһәмиәт бирмәй йәшәгәнмен. Башҡортлоҡ хәҡиҡәт булып аңға һеңгән дә, ниндәйҙер дәлилләү талап итмәгән барлыҡ булды микән? Башҡортлоғом менән ғорурландым, әлбиттә. Ләкин тамырҙарыбыҙҙы төптән өйрәнеү, тарихыбыҙға күберәк әһәмиәт биреү булманы. Тынғыһыҙ эшкә һылтанырға булыр ине, тик мин улай тип әйтә алмайым. Мәле етмәгән булған, тим. Бына шул мәлде тыуҙырған йәшкә, халәткә еттем. Һәм уҡырға теләп тә, һатыуҙа таба алмаған китаптар күп булып сыҡты.

Әкрәм Бейештең "Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше"н , Аҫылғужа Баһумановтың "Салауаттың йөҙө" һәм башҡа башҡорт әҙәбиәтенең һиңйы китаптарын ҡулыма алғым килә. Уҡыным мин уларҙы. Электрон вариантын. Тик миңә китап көйө кәрәк ине. Бына шулай.

Ә ҡәләмдәштәрҙең китаптарын баҫылып сығыу менән һатып алып ҡалырға тырышам. Мөмкинлек булғанда, автографтарын алам. Был бит хөрмәт йөҙө. Сәхифәһендә йөрәк ҡуйып үтеү, матур һүҙ әйтеү - бер, китабыңды уҡыным, һаҡлайым, тип белдереү үҙе бер ихтирам билдәһе, тип уйлаймсы мин. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

✓ *"Совет архивтары" журналында хәбәр ителеүенсә (№5, 1988 й.), 1929 - 1934 йылдарҙа "Башҡорт АССР-ында башҡорттар йәшәгән ҡайһы бер районларҙа бары тик рус йәки татар мәктәптәре генә ойошторола.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИЛАП ТУҠТАҒАС ЙОҠЛАТ

■ Бала илаһа ла, үҙаллы йоҡлап китһә, яҡшыраҡ, тиҙәр. Әммә белгестәр быны бала өсөн зарарлы тип иҫәпләй ине. Һуңғы тикшеренеүҙәр был хәбәрҙе кире ҡаға. Беренсе - Фербар ысулында ата-әсә оҙаҡ ваҡыт бала янына бармай, уның илап туктағанын көтә. Икенсе ысулда баланың үҙенең йоҡоһо килгәнсе йөрөтөргә кәрәк. Ике ысул да балаларҙың йоҡлап китеүен тиҙләткән. Етмәһә, беренсе ысулда балалар төндә һирәк уянған. Илаған, организмда стресс гормоны күтәрелә, тигән фекер ҙә хата булып сыҡҡан, ғалимдар бындай бер тайпылыш та тапмаған.

■ Кофеиндың организм өсөн әллә ни файҙаһы булмаһа ла, иртән бер сынаяҡ ҡәһүә эсергә мөмкин. Депрессияны еңеүҙә иң яҡшы ысулы шул, ти белгестәр. 10 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәрҙә 50 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Был осорҙа уларҙың 2600-ендә депрессия теркәлгән, ҡағиҙә булараҡ, уларҙың береһе лә ҡәһүә ҡулланмаған. Кем көнөнә 1-2 сынаяҡ ҡәһүә эскән, улар депрессияға бирешеп бармаған. Киләсәктә кофеиндың баш мейеһенә тәьсирен өйрәнергә йыйыналар. Әлегә шул ғына билдәле - кофеин мейенең нервы күҙәнәктәре әүҙемлеген яйлатыусы аденозинды юҡҡа сығара. Был продукт допамин бүленеп сығыуҙы әүҙемләштерә.

■ Кешенең тиреһе көн һайын төрлө тәьсир кисерә, эҫе һауа торошо ла, һалҡындар ҙа унда сағылыш таба. Шуға ла тирене йәш, матур һаҡлау өсөн уға йыш ҡына балдан яһалған битлек эшләгеҙ, ти белгестәр. Тәү сиратта, бал тирене дымландыра. Һауалағы дымды тартыу һәләтенә эйә булыуы уға бында ярҙам итә. Тире ҡырҡылғанда, бешкәндә бал һөртөү унайлыраҡ, сөнки унда бактериялар үрсемәй. Әгәр ҙә балдың өҫтөн япмай ултыртып ҡуйһаң, унда бактериялар барлыҡҡа килмәйәсәк. Шуға ла ул тирене инфекциянан һаҡлай. Ниндәйҙер яра алғанда уға тәүҙә бал һөртөп, таҙа бинт менән урап ҡуйыу ҙа етә. 12 сәғәт һайын алыштыртып торорға кәрәк. Балдың составында үҙенсәлекле фермент инә, ул һыу менән ҡатнашҡанда водород перекисе барлыҡҡа килтерә. Ниһайәт, бал антиоксидант сифаттарға эйә.

■ Дәүләт Думаһында "Рәсәй ир-егеттәренең репродуктив сәләмәтлеге" темаһы буйынса үткән кәңәшмәлә ғаилә ҡорғанға тиклем йәштәр сәләмәтлектәрен күрһәтеүсе сетификат алырға тейеш, тигән тәҡдим индерелә. Йәғни, туйға тиклем үк уларҙың бала таба алыу-алмау мөмкинлектәре баһаланасаҡ. Шулай уҡ пациенттар үҙҙәренең сәләмәтлеген хәстәрләргә вәғәҙә биреп, ҡул да ҡуясаҡ. Рәсәйҙә, башҡа илдәр менән сағыштырғанда, хеҙмәткә яраҡлы йәштәге ир-егет күберәк үлә, был иһә балалар тыуыуҙы ла кәмetә. Шуға ла был сара халыҡ һанының артыуына ыңғай йоғонто яһар, тип көтәлә.

■ Мичиган университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, балалар телевизор ҡарағанда йәки видео уйындар уйнағанда ата-әсәләрен бөтөнләй ишетмәй. Заманса ҡоролмалар ата-әсәләргә үсмерҙәр менән генә түгел, мәктәпкәсә йәштәге балалары менән дә уртаҡ тел табырға ҡамасаулай. Тикшеренеү барышында ғалимдар 44 ғаиләнең көн дауамындағы һөйләшеүҙәрен тыңлаған. Асыҡланыуынса, юғары белеме булған әсәйҙәрҙең балалары телевизорҙы һирәгерәк ҡараған, гаджеттар менән һирәгерәк ҡулланған. Бындай ғаиләләрҙә балалар мәғлүмәти тапшырыуҙарға өҫтөнлөк биргән.

ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## 1923-1933 йылдарҙа нисек уҡытҡандар?




**Мәғлүм булыуынса, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу осоронда Башҡорт АССР-ында 3 миллион 844,3 мең кеше, шул иҫәптән 70-тән ашыу милләт вәкиле йәшәй.**

1926-1979 йылдар араһында башҡорттарҙың дөйөм һаны 657 меңгә арта. СССР буйынса башҡорттар 1 миллион 371 мең иҫәпләнә, шул иҫәптән Силәбе өлкәһендә - 133,7 мең, Пермь өлкәһендә - 48,8 мең, Ырымбур өлкәһендә - 43,3 мең, Свердловск өлкәһендә - 30 мең, Ҡурған өлкәһендә - 17,7 мең, Ҡаҙаҡ ССР-ында - 32,5 мең, Үзбәк ССР-ында - 25,9 мең.

Телдәрҙе үҫтереү һәм ҡулланыу өлкәһендә лә һиҙелерлек үҙгәрештәр була. Республика халҡының 87,1 проценты туған теле тип үҙ милләтенең телен атай: рустар - 99,9 процент (1970 йылда ла 99,9 процент була), татарҙар 94,3 (96,3) процент, башҡорттар 64,4 (63,2) процент. Башҡорт телен үҙенең туған теле тип 607,1 мең кеше белдерә, шуларҙың 602,9 меңе башҡорт милләтенән була, 4,2 меңе - башҡа милләттән.

1979 йылда 307,6 мең башҡорт туған теле тип татар телен атай, был башҡорт халҡының 32,9 процентын тәшкил итә. Бигерәк тә был Асҡын (94,6 процент), Балтас (85,5 процент), Борай (92,2 процент), Дүртөйлө (93 процент), Илеш (94,8 процент), Краснокама (84,7 процент), Кушнаренко (94,4 процент), Тәтешле (96,1 процент), Туймазы (95,4 процент), Саҡмағош (89,6 процент), Яңауыл (87,7 процент) райондарында, йәғни башҡорт балаларын уҡытыу татар телендә алып барылған төбәктәрҙә күҙәтелә.

"Совет архивтары" журналында хәбәр ителеүенсә (№5, 1988 й.), 1929 - 1934 йылдарҙа "Башҡорт АССР-ында башҡорттар йәшәгән ҡайһы бер райондарҙа бары тик рус йәки татар мәктәптәре генә ойошторола, сөнки урындағы мәктәп етәкселеге кадрҙар һәм дәреслектәр булмауы сәбәпле, башҡорт мәктәптәрен асыу мөмкин түгел, тип иҫәпләй" (ЦГА РСФСР, ф.296, Оп.1, д.461, Л.98).

Партия архивы һәм матбуғатта сыҡҡан башҡа материалдар раҫлауынса, башҡорт телен тормошҡа ашырыуға бәйле мәсьәләләр партия Өлкә комитетында бер нисә тапҡыр ҡарала. Мәҫәлән, 1923 йылдың 12 декабрендә ВКП(б) Өлкә комитеты кәңәшмәһендә башҡорт телен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тураһында һөйләгәндә: "1920 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса башҡорттар 970434 (32,06 процент) кеше, татарҙар - 612405 (20,23 процент); 1922 йылда башҡорттар 648209 (26,34 процент), татарҙар - 601012 (24,43 процент)", - тип билдәләнә. Башҡорттар күпләп йәшәгән урындарҙа беренсе баҫҡыс мәктәптәрендә уҡытыуҙы - башҡорт, татарҙар күп булған ерҙә татар телендә ойоштороу тәҡдим ителә.

Ошо уҡ кәңәшмәлә ни өсөн ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар татарса һөйләшкәнен асыҡларға тырышҡан сығыштар ҙа була. Был проблемаға бәйләп, революцияға тиклем башҡорттар ғына түгел, сыуаштар ҙа, вотяктар ҙа, сирмештәр ҙә, Волга буйының башҡа халыҡтары ла татарҙар йоғонтоһо аҫтында булыуы, татарса һөйләшеүе һәм татар ғөрөф-ғәҙәттәрен ҡабул итеүе, татар һәм урыҫ дин әһелдәре араһында ошо төбәктең башҡа халыҡтарына хакимлыҡ итеү буйынса ҡаты алыш барыуы билдәләнә.

Кәңәшмәлә әйтелеүенсә, бигерәк тә 1912 йылдан алып империалистик һуғышҡа тиклем татар зыялылары панисламистар ярҙамында был халыҡтарға ҡарата көслө көрәш алып бара. Улар тотош көнсығышты татар халҡы йоғонтоһона берләштерергә тырыша... Быны шундай бер факт та раҫлай: йыш ҡына үҙ телендә һөйләшкән башҡорттарҙың телмәре татарҙар тарафынан көлкө объектына әйләнә, һөҙөмтәлә башҡорттар ватып-емереп татарса һөйләшергә тырыша башлай. Былар барыһы ла - татар зыялыларының барлыҡ халыҡтарҙы ла татарлаштырыу буйынса көслө эшмәкәрлеге ошо кәңәшмәлә билдәләнә.

Шулай уҡ кәңәшмәлә татар эшмәкәрҙәренең татар әҙәбиәтен, типографияһын булдырыуы телгә алына. Башҡорттар өсөн дә татар теле әҙәби телгә әйләнә. Башҡорттарға башҡорт мәктәбен асыу, әҙәби тел булдырыу мөмкин-

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# УТТА ЯНМАЙ, ҺЫУҘА БАТМАЙ...

**Баш ҡаланың Дим биҫтәһендә урынлашҡан 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында үткән түңәрәк ҡор халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы - легендар дивизияның командиры генерал Миңлеғәли Шайморатовҡа ихтирамдың бер сағылышы булды.**

БР Фәндәр академияһы, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институты, Шайморатов музейы ойошторған сарала тәбрикләү һүҙе менән сығыш яһап, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, БР Яҙыусылар берлеге рәйесе Зәки Әлибаев башҡорт әҙәбиәтендә генералдың образына бирелгән урын тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, беренселәрҙән булып уға уҙған быуаттың 50-се йылдары һуңында Ибраһим Абдуллин мөрәжәғәт итә һәм "Шайморатов генерал" пьесаһын яҙа, Ҡадир Даян ҡәләменән сыҡҡан "Шайморатов генерал" йыры хәҙер инде халыҡ йыры кимәлендә



йөрөй. Заман шауҡымымы, әллә башҡа сәбәптәнме, артабан был образ иғтибарҙан төшөп ҡала һәм бары тик 80-се йылдарҙа ғына Тайфур Сәғитов "Аманат" китабын нәшер итә. Тиҫтә йыл самаһы үткәс, Яныбай Хамматовтың "Башҡорттар китте һуғышҡа" китабы донъя күрә һәм быға тиклем булған әҫәрҙәрҙән айырмалы, унда Шайморатов образы ныҒыраҡ асыла.

Башҡорт дәүләт университетының кафедра мөдире, тарих фәндәре кандидаты Рәмил Рәхимовтың сығышы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында РККА-ның 8-се кавалерия корпусының юғары кадрҙар составына арналды. Корпус менән командалыҡ иткән Корзун, Лунев, Жадов, Дудко, Борисов - улар Буденныйҙың мәктәбен үткән кешеләр, тәжрибәле кавалеристар, йәғни хәрби әҙерлектәре бер кимәлдә була. Корпусҡа ингән 55-се Алтай, 112-се башҡорт, 21-се таулы кавалерия дивизиялары тип аталыуға ҡарамаҫтан, уларҙың нигеҙен Волга буйы республикалары халыҡтары алып тора.

леге бирмәйҙәр. Шулай итеп, элекке Өфө, Бөрө, Бәләбәй кантондары башҡорттары барыһы ла тиерлек ассимиляциялана.

"Әммә үҙ телен һәм үҙ йөҙөн һаҡлаған башҡорттар бар әле. Башҡорт теле һәм башҡорт халҡы йәшәй икән, беҙ уға ярҙам итергә, шул телдә уҡыу һәм үҫешеү мөмкинлеге бирергә тейешбеҙ. Башҡорт теле баҫылып ҡалырға тейеш түгел. Әгәр элек татар буржуазияһы һәм либераль татар зыялылары башҡорттарҙы татарлаштырыуға өлгәшһә, хәҙер ундай заман үтте һәм беҙ бөйөк татаризм державаһы ҡалдығын тамырынан юҡҡа сығарырға тейешбеҙ. Был мөһим сәйәси әһәмиәткә эйә", - тигән сығыштар яңғырай кәңәшмәлә.

Әммә 1923 йылда башҡорт телендә уҡытыуға күсеү мөмкинлеге булмай әле. Башҡорт ауылдарындағы беренсе баҫҡыс мәктәптәрендә уҡытыусыларҙың 85 проценты татар була һәм татарса уҡыта. Икенсе баҫҡыс башҡорт мәктәптәрендә уҡыу планына ярашлы башҡорт теле предмет булараҡ өйрәнелергә тейеш була. Әммә башҡорт телендә дәреслектәр һәм башҡорт телен белгән уҡытыусылар булмау сәбәпле, барлыҡ мәктәптәрҙә лә татар теле уҡытыла. "Хәҙерге ваҡытта беҙҙең власть татар телендә яҙа һәм гәзиттәр сығара һәм барса халыҡ татарса уҡырға һәм һөйләшергә мәжбүр", - тип билдәләнә кәңәшмәлә.

1923 йылдың 29 декабрендә башҡорт телен тормошҡа ашырыу буйынса ғәмәли эш мәсьәләһе РКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты ултырышында ҡарала. Өлкә комитет Президиумы Мәғариф халыҡ комиссариатына:

- беренсе баҫҡыс мәктәптәре өсөн башҡортса әлифба һәм дәреслектәр эшләүҙе башларға;
- беренсе баҫҡыс мәктәптәрендә уҡытыуҙы барлыҡ милләттәр өсөн дә туған телдә алып барырға һәм Наркомпросҡа беренсе баҫҡыс мәктәптәрен уҡытыусылар менән комплектларға;
- барлыҡ икенсе баҫҡыс мәктәптәрҙә һәм һөнәри белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен мотлаҡ предмет итеп индерергә;
- беренсе баҫҡыс мәктәптәрен башҡорт уҡытыусылары менән тәьмин итеү маҡсатында артабан техникум уҡыусыларын башҡорттарҙан ғына туплауға Наркомпростың айырым иғтибарын йүнәлтергә ҡуша.

Быға тиклем, бигерәк тә Граждандар һуғышы йылдарында, башҡортса айырым брошюралар һәм листовкалар сығарылһа ла, башҡорт телендәге әҙәбиәт 1922-1923 йылдарҙа булдырыла башлай. 1922 йылда ойошторолған "Башкитап" нәшриәте 1922-1923 йылдарҙа 80 баҫма биттә 21 китап сығара, әммә шуларҙың 4-5 баҫма бите генә башҡортса була.

1928 йылда башҡорт мәктәптәрен туған телдә уҡытыуға күсереүгә йөҙ борола; башланғыс һәм урта мәктәптәргә башҡорт телендә 17 төрлө дәреслек бирелә.

Әммә был эштә лә етешһеҙлектәр була. Шуға күрә 1931 йылда үткән ВКП(б)-ның Өлкә край комитеты һәм Өлкә комитетының берләштерелгән пленумы барлыҡ Башҡортостан партия ойошмаһының иғтибарын бөйөк держава шовинизмына, урындағы милләтселеккә ҡаршы киҫкен көрәш алып барыу менән бер рәттән, татарҙарҙың "башҡорт теленең һәм әҙәбиәтенең перспективаһыҙлығы" теорияһына өҫтөнлөк биреп, башҡорт мәктәптәрендә татар телен индереүҙә, урта һәм юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле урынына татар телен "милли" тел тип уҡытыуҙа, эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе башҡорт һәм татар тип түгел, "милли" тип иҫәп алып барыуҙа сағылған башҡорттарға ҡарата булған бөйөк держава тенденцияһына ҡаршы көрәшеү зарурлығына йәлеп итә.

Пленумда революцияға тиклем элекке Өфө губернаһы территорияһында татар муллалары тарафынан асылған 1579 татар мәктәбе булыуы һәм бер генә башҡорт мәктәбе лә булмауы билдәләнә. БАССР Халыҡ комиссарҙары советы рәйесе Булашев үҙенең сығышында милли кадрҙар әҙерләү, туған телде уҡытыу торошон анализлап, республикала һуңғы йылдарға тиклем милләттәрҙе йәлеп итеү эше алып барылмауын, һөҙөмтәлә был йәһәттән Башҡортостан иң артта ҡалған республика булыуын билдәләй һәм шундай факттар килтерә: "Ҡаҙағстанда, мәҫәлән, эшселәрҙең 25 проценты ҡаҙаҡтар, Сыуашстанда - 35 процент сыуаш, Татарстанда - 28,9 процент татар, Башҡортостанда - 13 процент башҡорт була. 1929 йылда дәүләт аппаратында башҡорттар 12 процент тәшкил итә, Сыуашстанда - 48, Татарстанда - 36. Ҡырым һәм БАССР-ҙан тыш, башҡа республикаларҙа дәүләт аппаратында төп милләт вәкилдәре 30-40 процент тәшкил итә. Илдең юғары уҡыу йорттарында уҡыусылар күләме лә түбән булып ҡала: 1939 йылда башҡорт студенттары 0,1 процент, татарҙар - 1,3, сыуаштар 0,9, бүрәттәр 0,1 процент (улар барлығы 200 мең кеше) тәшкил итә".

"Башҡорттарҙы татарҙар тарафынан ассимиляциялау бармы?" тигән һорау күтәреп, сығыш яһаусы ундай процестарҙың булыуын билдәләй. "Рәсми мәғлүмәттәр буйынса башҡорттар 800 мең иҫәпләнә. Бөгөнгө көнгә ҡарата уларҙың 53 проценты ғына туған телендә һөйләшә. Советтар Союзының башҡа халыҡтары араһынан кемдер 98, ҡайҙалыр 92, 71 процент үҙ телендә һөйләшә, башҡорттар ғына 53 процент тәшкил итә. Үҙ телендә грамоталы башҡорттар ни бары 40 процент, шул уҡ ваҡытта татарҙар - 98 процент. Был һандар рәсми, Коммунистик академия тарафынан эшләнгән..."

1933 йылда башҡорт мәктәптәре ВКП(б) Өлкә комитетының тотороҡло дәреслектәр сығарыу тураһындағы ҡарары нигеҙендә беренсе тапҡыр туған телендә тотороҡло, яҡшы әҙерләнгән һәм техник йәһәттән биҙәлгән дәреслектәргә эйә була. Башланғыс мәктәп өсөн дөйөм тиражы 372 мең дана булған шундай 24 төрлө китап сығарыла, урта мәктәп өсөн дөйөм тиражы 163 меңлек 30 атамалы китап нәшер ителә.

ВКП(б)-ның XVII съезында (1934 йыл) Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретары Я.Б. Быкин республикала халыҡ мәғарифы торошон баһалап, хәҙерге Совет Башҡортостаны территорияһында (йәғни 1914 йылға тиклем) тотош халыҡтың грамоталылығы 22 процентҡа тиң була, тип белдерә. Был Башҡортостандың тотош халҡына ҡағыла. Аҫаба халыҡтың грамоталылығы унан да түбән була: ул бер процент менән генә билдәләнә... 1913-1914 йылдарҙа башланғыс мәктәп уҡыусылары 102 мең иҫәпләнә, шул иҫәптән башҡорт-татарҙар (башҡорттар айырым иҫәпләнмәй) - 18 мең, ә 1933 йылда 367 мең уҡыусының 215 меңе рус милләтенән булмай, шул иҫәптән 80 мең башҡорт.

"Урындағы милләтселек һәм бөйөк рус шовинизмына ҡаршы көрәштә беҙ Башҡортостанда дөйөм белем биреүҙе тормошҡа ашырҙыҡ. Уҙған 1933 йылда тотороҡло башҡорт дәреслеге булдырылды. Башҡорт телендә уҡытыу өсөн башҡорт уҡытыусылары әҙерләнә (һуңғы йылдарға тиклем мәктәптәрҙә татар уҡытыусылары башҡорттарҙы татар телендә уҡыта). Революцияға тиклем мәктәптәрҙә берәм-бөртөк уҡыһалар, 1929 йылда - 1600 башҡорт балаһы белем ала, хәҙер урта мәктәптә 9 мең башҡорт уҡый. Партияның XVI съезына бер генә юғары мәктәп тә булмаһа, XVII съезға 5 юғары уҡыу йорто, 5 фәнни-тикшеренеү институтына эйәбеҙ, уларҙа уртаса 40-44 процент башҡорт уҡый", - тип билдәләнә съездың стенографик отчетында.

Ошо йылдар эсендә мәғрифәтселәрҙең ҙур армияһы барлыҡҡа килә. Әгәр 1913-1914 йылдарҙа башланғыс мәктәптәрҙә 2255 уҡытыусы булһа, 1923-1933 йылдарҙа уларҙың һаны 9200-гә етә, шул иҫәптән башҡорттар 1913-1914 йылдарҙа - 67, 1932-1933 йылдарҙа - 1893 кеше була.

**Ғизетдин ИРҒӘЛИН,**
**КПСС Өлкә комитеты партархивының элекке мөдире.**

---

Корпус ил өсөн әһәмиәтле Мәскәү, Сталинград, Донбасс һ.б. алыштарҙа ҡатнаша. Бөгөн ниндәй генә имеш-мимештәр йөрөмәһен, Борисов Шайморатовҡа Советтар Союзы Геройы исеме биреү тураһындағы документҡа ҡул ҡуя. Әммә тарихтың беҙгә асылмаған һәм һаманғаса йәшерен грифы аҫтында булған материалдары ла бихисап. Шулай ҙа дошмандың етди ҡоралланған армияһына ҡаршы һыбайлыларҙы ебәреү дөрөҫ булғанмы? Рәмил Нәсибулла улы белдереүенсә, ул заманда стратегия бик ентекләп уйланылған була, кавалерия бер ваҡытта ла яңғыҙы ғына алышҡа инмәй, уны танкылар, артиллерия, автоматсылар һ.б оҙатып барырға тейеш тиелә һәм шулай итәләр ҙә. Ләкин һуғыш мәле икәнлеген һәм кеше факторын да онотorға ярамай - улар уйланылған стратегияға үҙ эҙен һала.

"Любизар" 1-се Башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клуб" Төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Илдар Шәйәхмәтов быйыл Тербунила хәрби-тарихи реконструкция фестивалендә ҡатнашып ҡайтыу тәьҫораттары менән бүлеште. Ниһайәт, "Аҡбуҙат" ипподромы клубҡа ярҙам күрһәтеп, 5 ат һәм уларҙы юлда йөрөтөү өсөн махсус фургон биргән, әммә ойоштороусылар киләһе йылда башҡорттарҙың тағы ла күберәк килеүен үтенгән. Ғөмүмән, Илдар Ғиндулла улы һәм Тербунила булғандар бер тауыштан урындағы халыҡтың Башҡортостан вәкилдәрен, башҡорттарҙы һәр саҡ ҡолас йәйеп, йылы ҡабул итеүҙәрен, һыҙыҡ өҫтөнә ала. Геройҙар аллеяһында ла Шайморатовҡа ҡуйылған бюст башҡаларҙан айырылып тороуы менән иғтибарҙы йәлеп итә, ти улар. Башҡа бюстарҙың нигеҙе бер төрлө булһа, Миңлеғәли Минһаж улыныҡы граниттан ентекле эшләнгән. "Бының менән улар Шайморатовтың гранит кеүек ныҡлы булыуын әйтергә теләгәндер", - ти Илдар Ғиндулла улы.

Журналист, крайҙы өйрәнеүсе Борис Малородов командирҙар составындағы мөнәсәбәттәр, Миңлеғәли Шайморатовтың һәләк булыу шарттары тураһында фекер белдерҙе. Бик йыш булмаһа ла, бөгөн Шайморатов һәләк булғанмы, әллә әсирлеккә эләккәнме, тигән һорауҙар ишетелеп ҡалғанда, Борис Яковлевичтың һәм тарихсыларҙың яуабы бер: генерал тиклем генерал әсирлеккә эләкһә, был хаҡта архивтарҙа документтар мотлаҡ булыр, немецтар ҙа был хаҡта яҙыр ине. Мәҫәлән, Борисовтың әсирлектә булыуы рәсми документтар менән раҫлана. Әммә Шайморатовтың әсирлеккә эләгеүе тураһында бер генә документ та юҡ, тимәк, ул һәләк булған, тип белдерҙе. Шулай уҡ Б. Малородов Луганскиҙа Шайморатов ерләнгән тип күҙалланған ҡәбергә эксгумация эшләп, ҡабаттан экспертиза үткәрергә теләүҙәрен белдерҙе.

**(Дауамы 15-се биттә).**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Утты нисек яндырырға

Артабанғы бүлектәрҙә һеҙ был илаһи бәйләнеште байлыҡ, мөхәббәт һәм проблемаларығыҙҙы хәл итеү өсөн ҡулланырға өйрәнерһегеҙ. Әммә әлегә һеҙгә әле генә ҡабыҙған ялҡынды нығыраҡ яндырырға кәрәк. Тиҙҙән ул көсәйеп, тормошоғоҙҙо яҡтыртыр.

Бында ике нәмә бигерәк тә мөһим:

1. Кинәнеп Юғары Минегеҙ менән ҡосаҡлашҡанығыҙҙы иҫләгеҙ.
2. Был тәжрибәгеҙ хаҡында башҡаларға һөйләмәгеҙ.

Юғары Минегеҙҙең образын һәм уның менән ҡосаҡлашҡанығыҙҙы иҫләп, һеҙ булдырған бәйләнеште нығытаһығыҙ. Быны сер итеп тотоғоҙ. Башҡалар менән был хаҡта фекер алышһағыҙ, энергиягыҙ таралып, бер көн килеп рухи ҡаҙаныштарығыҙ тамырынан ҡороясаҡ.

Әгәр был хаҡта үҙ алдығыҙға, башҡаларҙан йәшереп кенә уйлаһағыҙ, был шунда уҡ файҙаға китер. Һеҙ үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тоя башларһығыҙ. Тормош тураһында яҡшыраҡ уйларһығыҙ. Һуңынан тартыу көсө буйынса тағы бер нәмә тормошҡа ашыр. Һеҙ был тормошта нимә кәрәк, хатта ынтылған нәмәгеҙ булмаһа ла, шуны үҙегеҙгә тарта башлаясаҡһығыҙ. Быға матди байлыҡ та, мөхәббәт тә инә.

Беренсе бүлектә мин иғтибарығыҙҙы башҡаларға ҡарата изге эштәр ҡылырға һәм ниндәй генә ижад эше булмаһын, яулаған ҡаҙанышта туҡтап ҡалмаҫҡа кәрәклеккә йүнәлтәм. Был Юғары Минегеҙҙең, тимәк, Ижадсының, Булдырыусының һеҙгә мөнәсәбәтен булдырыр. Һәр изге эш һеҙ ҡабыҙған ялҡынды көсәйтер. Һеҙ үҙегеҙҙе аҡыллыраҡ тота һәм ҙур һәләттәрегеҙҙе күрһәтә башларһығыҙ.

"Увеличение творческих способностей" китабында Уиллис Хармон менән Говард Рейнголд: "Һабаҡ алынырға мөмкин, һәм иң ышанысл уҡытыусы - үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙ", - тип яҙа.

Юғары Мин менән аралашыу тәжрибәһен иҫләү - һоҡланғыс. Әммә тиҙҙән беҙгә тағы ла бер аҙым эшләргә тура килер. Һеҙгә Юғары Минегеҙҙе саҡырып, көсөргәнештән арынырға һәм Уның менән әңгәмәләшергә тура килер. Уйҙа ғына һөйләшергә һәм тыңларға кәрәк. Ишеткәнегеҙ бүлмә стеналарын һелкетерлек булмаҫ. "Хәҙер мин һиңә нимә эшләргә икәнен һөйләрмен", - тигән көслө тауыш та булмаҫ. Быны көтмәгеҙ, сөнки оҙаҡ көтөргә тура килер.

Барыһы ла бер мәлдә буласаҡ. Һеҙгә нимә эшләргә кәрәклеге тураһында уйҙар килер. Улар һеҙгә үҙегеҙҙең уйығыҙ кеүек булыр, әммә ысынбарлыҡта ул юғары сығанаҡтан киләсәк. Һеҙ уларҙы һоҡланғыс идеялар тип ҡабул итерһегеҙ.

Һеҙ хаҡлы. Бынан да яҡшыраҡ булмай.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 27 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Небесные родственники". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Команда мечты". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 28 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Небесные родственники". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Хазина о хазине. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Летнее время". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 29 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Небесные родственники". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Богиня". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Караул, тещу украли!" [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 30 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Небесные родственники". [12+]
3.55 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Людмила Гурченко". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Үткән гүмер. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**19.45 "Елкән". [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "(НЕ)идеальная женщина". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 1 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.50 Х/ф "Чужая женщина". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Врачи". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 "Музыка в сердце". Сборный концерт ко дню музыки. [12+]**
**14.00 "Я люблю тебя, жизнь!"**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.15 Учим башкирский язык. [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Москва). КХЛ.**
**22.00 Автограф. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Большие надежды". [12+]**
**2.45 "Земляки". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 2 ОКТЯБРЯ СУББОТА

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Взгляд из вечности". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Все как у людей". [12+]
1.00 Х/ф "Сколько стоит счастье". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 "Созвездие талантов". [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 4.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени.**
**17.00 Концерт. [12+]**
**19.00, 5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Найти и полюбить". [16+]**
**2.15 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 3 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

**РОССИЯ 1**

5.20, 3.15 Х/ф "Вечная сказка". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Праздничный концерт.
14.00 Т/с "Взгляд из вечности". [12+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Цена измены". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте".**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет.**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Хазина о хазине. [6+]**
**15.45 Х/ф "Листок". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт Роберта Юлдашева и группы "Курайсы". [12+]**
**18.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**18.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**18.50 Хоккей. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж.**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.45 Х/ф "Богиня". [12+]**
**1.15 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 сентябрь "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 октябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 6+ 12.00

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30 сентябрь "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 16+
**2 октябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 11.00, 13.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+
**3 октябрь "Слоненок"** (Р. Киплинг). 11.00, 13.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 октябрь "Дыхание музыки в веках"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**3 октябрь "Познавайка в стране Узнавайка"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 сентябрь "Юл ҡағиҙәләре әкиәттә"** (Л. Ниғмәтуллина). Әкиәт. 11.00 0+
**"Уйын тамам"** (З. Сөләймәнов), йәштәр өсөн социаль драма. 12+
**28 сентябрь "Янғындан һаҡлан!"** (Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 11.00 6+
**29 сентябрь "Кемдәргә ҡағыла"** (Д. Сидерос), йәштәр өсөн социаль драма. 12+
**1 октябрь "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**2 октябрь "Өс суҫка"** (З. Сөләймәнов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

Өфөлә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә
**28 сентябрь "Ҡыҫҡ сырағым"** (М .Ҡаһарманова), моноспектакль. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Сентябрь - Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (20) дүшәмбе | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 28 (21) шишәмбе | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 29 (22) шаршамбы | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |
| 30 (23) кесе йома | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 1 (24) йома | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 2 (25) шәмбе | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 3 (26) йәкшәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ **50 г гөлбаҙран сәскәһен (пижма), 30 г әрем үләнен, 30 г ҡәнәфер бөртөктәрен термосҡа һалабыҙ. Уның өҫтөнә ҡайнап торған бер литр һыу ҡоябыҙ һәм 3-4 сәғәт тотабыҙ. Ошо төнәтмәне 2 аҙна буйы иртәле-кисле 200 мл эсәбеҙ.**



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 29 СЕНТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ЙӨРӘК КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ханов. Ташбаҡа. Төйләгән. Рантух. Урман. Өләш. Маугли. Иртә. Ҡисса. Тин. Үгәй. Кипу. Лупа. Лондон. Наҙлы. Тубал. Ҡына. Киев. Абаға. Ысыҡ. Атай.

**Вертикаль буйынса:** Ураҡсин. Тимерсе. Намаҙлыҡ. Трал. Ыласын. Өҙөк. Аншлаг. Атама. Баҡа. Нәшер. Бала. Ваҡыт. Ғата. Рәхмәтуллина. Үрнәк. Тинг. Хәкимйәнов.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ПАРАЗИТТАРҘАН...



**Ябыҡ ҡына кәүҙәле, һәр саҡ хәлһеҙ йөрөгән бер апайҙың "Организмымда теләһә ниндәй паразиттар күбәйгән, тиҙәр, ә дарыуҙары һөҙөмтә бирмәй", тип зарланыуын ишетеп, күңелдә ниндәйҙер бер шикләнеү, ҡурҡыу тойғоһо яралғайны.**

Эйе, организмдағы теләһә ниндәй паразиттар кешеләрҙе онкология сирҙәренә алып барып еткерә, сөнки улар һалған йомортҡалар тәндәге төрлө ағзаларҙы серетә башлай һәм урынында шеш барлыҡҡа килтерә, тип уҡыған бар ине. Пандемия ваҡытында әлеге апай бөтөнләй күренмәне. Ошо көндәрҙә тағы осраттым һәм аптырап киттем - бөтөнләй икенсе кешегә әйләнгән. Тулыланған, йәшәреп киткән, күҙҙәре яна. "Йүнәлдем бит мин, йүнәлдем! Халыҡ медицинаһы ысулын өйрәткәйнеләр. Ярты йыл тигәндә кеше булдым. Әле лә ваҡыты-ваҡыты менән профилактика өсөн эсәм", - тине.

Шулай итеп, ошо апайҙың паразиттарҙан дауаланыу рецебын тағы иҫкә төшөрәйек. Сөнки ул күптән интернет селтәрендә йөрөй. 50 г гөлбаҙран сәскәһен (пижма), 30 г әрем үләнен, 30 г ҡәнәфер бөртөктәрен термосҡа һалабыҙ. Уның өҫтөнә ҡайнап торған бер литр һыу ҡоябыҙ һәм 3-4 сәғәт тотабыҙ. Ошо төнәтмәне 2 аҙна буйы иртәле-кисле 200 мл эсәбеҙ.

**Интернет селтәрендә остеохондроздан йонсоғандарға дөгө кеүәҫе тәҡдим итәләр. Уның да файҙаһы бар тиҙәр. Шуны ла күҙгә әләйек әле:**

4 ҡалаҡ дөгө (яҡшы сифатлы), 3 ҡалаҡ шәкәр ҡомо, 1 ҡалаҡ йөҙөм алаһың. Дөгөнө һыуҙа һәйбәтләп йыуырға. Уға 1 литр һыу ҡойорға һәм шәкәр менән йөҙөм өҫтәргә. 4 көн тотҡас, һөҙөп, һыуытҡысҡа ултыртырға. Һөҙгәндән ҡалған массаны тағы ла кеүәҫ әҙерләү өсөн әсетке итеп ҡулланырға мөмкин.

**Һылыу ҒӘЛИЕВА.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...



# УТТА ЯНМАЙ, ҺЫУҘА БАТМАЙ...

**(Башы 12-13-сө биттәрҙә).**

Яҙыусы Флүр Ғәлимов Шайморатов тураһында яңы повесының яҙылыу тарихы менән таныштырһа, "Башҡорт энциклопедияһы" фәнни учреждениеһының бүлек мөдире Анастасия Корочкина "Шайморатовсылар - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" электрон һәм баҫма ресурсы проекты тураһында һөйләне. Уның сығышына өҫтәмә итеп "Киске Өфө" гәзите журналисы, Башҡорт Википедияһы ирекмәне Зәйтүнә Ниғәмәтйәнова Башҡорт Википедияһында Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереүгә субсидия рәүешендә бирелгән БР Башлығы гранты ярҙамында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары тигән проект асылыуы һәм быйыл июндә мәҡәләләр яҙыу буйынса конкурс үтеүе, уның һөҙөмтәләре менән таныштырҙы, эш барышында асыҡланған етешһеҙлектәр тураһында һөйләне, тарихсыларҙы, энциклопедия хеҙмәткәрҙәрен, ғөмүмән, битараф булмағандарҙы хеҙмәттәшлеккә саҡырҙы.

Сығыш яһаусыларҙың Шайморатовҡа, уның эргә-тирәһендәгеләр менән мөнәсәбәтенә һәм башҡа мәсьәләләр буйынса әленән-әле бәхәскә инеүе лә геройҙың биографияһы, тормош һәм яу юлының тулыһынса асыҡ булмауына ишараланы, әлегә ҡайһы бер мәлдәр фараз рәүешендә генә йәшәп килә, ә реаль тарихи шәхес, реаль ваҡиғалар аныҡ рәсми документтарға нигеҙләнергә тейеш. Юҡһа, теләгән һәр кем тарихты үҙенсә бороп ебәрергә лә күп һорамай. Хәйер, яңы ҡабул ителгән ил Конституцияһында тарихты үҙгәртеп яҙыуға юл ҡуймау тураһында махсус статья индерелде, ул сит ил тарихсыларының хеҙмәтенә генә түгел, тәү сиратта Рәсәй халыҡтарының тарихын "урлаған" йәки боҙоп күрһәткән, үҙенсә, үҙ мәнфәғәтендә интерпретациялаған ҡайһы бер Рәсәй тарихсыларына ла ҡағыла тип өмөтләнәйек.

Шулай уҡ Рәмил Рәхимов белдереүенсә, хәрби берләшмәләрҙең исеме уларҙың һуңғы атамаһы менән йөрөүе билдәле. Әммә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 16-сы гвардия кавалерия дивизияһына әйләндерелеүгә ҡарамаҫтан, уны беҙҙә һаман да элекке исеме менән атау ғәҙәткә ингән. Рәмил Насибулла улы уны 16-сы гвардия (112-се Башҡорт) Ленин орденлы Чернигов, Ҡыҙыл байраҡлы Суворов һәм Кутузов орденлы кавалерия дивизияһы тип атау яғында. Бында мотлаҡ "Башҡорт" һүҙе ҡалырға тейеш, сөнки ул тап Башҡортостанда ойошторолған дивизияның варисы була һәм һуғыш һуңында ла уның яугирҙарының 20 процентын Башҡортостан вәкилдәре тәшкил итә. Бындай уникаль дивизия башҡаса бер ҡайҙа ла булмай, ә уның легендар командиры кеүек хәрби етәкселәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Әйткәндәй, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, дивизияны һуңғы атамаһы буйынса 16-сы гвардия (112-се Башҡорт) Ленин орденлы Чернигов, Ҡыҙыл байраҡлы Суворов һәм Кутузов орденлы кавалерия дивизияһы тип тулыһынса яҙыу буйынса һеҙҙән фекерҙәр көтәбеҙ. Юҡһа, Илдар Шәйәхмәтов: "Мәскәүҙә Поклонная горала музейҙа нисә тапҡыр булдым, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тураһында мәғлүмәт тапманым. Һуңынан ғына 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы тип эҙләп таптым", - тигәйне. Бер нисә тиҫтә йылдан һуң 112-се Башҡорт кавдивизияһы тигән атама бөтөнләй хәтерҙән юйылмаһын ине, тип, алдан иҫкәртеп ҡуйыу урынлы...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*Йүнле ҡатын-ҡыҙ биографияһы - ул утыҙ йәшкә тиклем хронологиянан, утыҙҙан һуң мифологиянан тора.*

*(Дон-Аминадо).*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

#ҺЕҘҘЕ ТЕАТРҘА КӨТӘЛӘР




**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ла яңы ижад миҙгелен асты. Театрҙың тамашасылар өсөн ҡыҙыҡлы яңылыҡтары, киләсәккә пландары тураһында баш режиссер Рөстәм ХӘКИМОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**➔ Яңы ижад миҙгелендә театр тамашасыларын ниндәй яңылыҡтар көтә?**

- Быйылғы миҙгелдә театрҙың ике труппаһы ла тамашасыға яңы спектаклдәр тәҡдим итте. Рус труппаһы Александр Пушкин әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән "Капитанская дочка", ә башҡорт труппаһы Нил Саймондың пьесаһы буйынса "Яҙмышымдың икенсе бүлеге" тип аталған спектаклдәрҙе ҡуйҙы. Тәүгеһе "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә ғәмәлгә ашырылды, режиссеры Искәндәр Саҡаев.

Шуны әйтеп үтергә кәрәктер: рус труппаһының репертуарын байытҡан спектаклдә башҡорт труппаһы артистары ла ҡатнаша. Мәктәп программаһындағы повесть нигеҙендә әҙерләнгән тамашаны 12 йәше тулған һәм унан өлкәнерәктәр килеп ҡарай ала. Был спектакль барыһына ла оҡшар, фәһемле булыр, моғайын. Ә бына "Яҙмышымдың икенсе бүлеге" билдәле Америка драматургының ярым автобиографик пьесаһы һәм уны башҡорт тамашасыларына БР-ҙың атҡаҙанған артисы Рәмзил Сәлмәнов тәржемә итте. Шулай уҡ артисыбыҙ был спектаклдә төп ролдәрҙең береһен башҡара. Тағы ла ролдәрҙә Башҡортостандың халыҡ артистары Рушанна Бабич һәм Гөлшат Ғайсина, актерыбыҙ Салауат Юлдашбаев уйнай. 16 йәштән өлкәнерәктәр өсөн тәғәйенләнгән трагикомедияның ҡуйыусы режиссеры БР-ҙың халыҡ артисы Азат Нәҙерғолов, рәссамы Рөстәм Баймөхәмәтов, балетмейстер һәм музыкаль яҡтан биҙәүсе - Рената Крицкая. Әҫәр үткән быуаттың 70-се йылдары аҙағында ижад ителгән һәм сәхнәләштерелгән, уның буйынса заманында фильм да төшөрөлгән. Әммә замандаш тамашасыбыҙ өсөн дә уның әһәмиәте, фәһеме һис кәмемәгән: кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр, мәңгелек төшөнсәләр, киҫерештәр уртаҡ. Ҡауышыуҙар, айырылышыуҙар һәр заманда ла була, ә яҙмыш һынауҙарын үтеү һәм бәхетле йәшәүгә үҙ юлыңды табыу мәсьәләһе барыһын да борсой. Бына ошолар хаҡында был спектакль һәм театр белгестәре лә, ябай тамашасылар ҙа уны бик йылы ҡабул итте. Трагикомедияны тапшырыу мәлендә геройҙар менән бергә йәшәгәндәй, уларҙың тойғоларын киҫергәндәй булдыҡ.

Ә киләсәккә пландарға килгәндә, тиҙҙән йәш тамашасыларыбыҙ өсөн әкиәт сәхнәләштерергә уйлайбыҙ. Әлегә бер нисә исем тәҡдим ителгән, һайлап алырға кәрәк. Бынан тыш, был ижад миҙгелендә репертуарыбыҙға алдан ингән бер спектаклде лә сәхнәнән төшөрмәҫкә ҡарар иттек. Быға тиклем берәй яңы әйбер ҡуйылһа, алдан уйналған тамаша төшөп ҡала торғайны. Тамашасыларҙың театрға йышыраҡ килергә теләге һәм мөмкинлеге булһын өсөн афишаны ошо рәүешле төрлөләндерергә булдыҡ. Тағы ла яңы йылдан һуң йәштәр өсөн романтик әҫәр сәхнәләштереп ҡыуандырырбыҙ, тип ниәт ҡороп торабыҙ. Был тамашаларҙа быйыл эшкә килгән йәш артистарыбыҙ - Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһын тамамлап ҡайтҡан Әбйәлил Үтәбаев, театр өсөн махсус уҡып сыҡҡан студенттар араһынан Зәриә Моратова һәм Салауат дәүләт башҡорт драма театрында ике миҙгел уңышлы ғына эшләп килгән йәш актриса Гөлсәсәк Зарипова ла ҡатнашасаҡ. Уларҙан тыш, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында яҡшы ғына өлгәшеп, белем алып йөрөгән егеттәр ҙә оҫталығын арттырыу, тәжрибә туплау маҡсатында театр эшенә йәлеп ителә.

**➔ Сентябрҙә Өфө тамашасыһы һеҙҙең сәхнәлә республиканың һәм Рәсәйҙең башҡа театр коллективтары ижады менән дә таныша алды, шулай бит?**

- Эйе, 15 сентябрҙән 18-нә тиклем А. Брянцев исемендәге Санкт-Петербург йәш тамашасылар театры гастролдәре үтте. Улар "Бедная Лиза", "Сказка о потерянном времени", "Маленькие трагедии", "Зимняя сказка" тигән спектаклдәр менән сығыш яһаны. Ә бына 30 сентябрҙә "Самарт" Һамар йәш тамашасы театры коллективы "Маугли", "Храбрый заяц" әкиәттәре, "Ханума" спектаклен алып килә. Әйткәндәй, "Ханума"ны беҙҙең башҡорт труппаһы ла сәхнәләштергәйне, шуға ул тамашасыларға айырыуса ҡыҙыҡ булыр һымаҡ. Шулай уҡ 25 сентябрҙә Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе "Киҫәкбикә. Риүәйәт" тигән премьера спектакле менән баш ҡала тамашасыларын ҡыуандырҙы. Ә беҙ, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, үҙ сиратыбыҙҙа 11 сентябрҙә "Мәҙәни шәмбе" Бөтә Рәсәй акцияһы сиктәрендә Дәүләкәнгә барҙыҡ. Шулай уҡ был көндә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында коллегалар менән бергә актерҙар онлайн шиғыр һөйләнеләр, кискеһен тамашасылар "Диләфрүзгә дүрт кейәү" һәм "Планета" спектаклдәрен бушлай билеттар буйынса инеп ҡарай алды. Был миҙгелдә театраль акциялар сиктәренән тыш та республика буйлап гастролдәргә йышыраҡ сығырға теләгебеҙ ҙур, тик тажзәхмәт кенә пландарҙы боҙмаһын. Сөнки был айҙа Ҡалмыҡ Республикаһында уҙғарылырға тейеш "Кееда" Халыҡ-ара балалар өсөн фестивалде киләһе йылға күсерергә, унда ҡатнашыуҙы кисектереп торорға тура килде инде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры репертуарында һәр йәш категорияһы өсөн фәһемле, тәрбиәүи, кәрәкле, төрлө жанрҙағы спектаклдәр күп. Ә иң мөһиме, унда үҙ һөнәрен яратҡан һәм тоғро ҡалған хеҙмәткәрҙәр ең һыҙғанып эшләй һәм баш ҡала тамашасылары, ҡунаҡтары менән осрашыуҙар көтә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪЛЫ ДОШМАН...

## намыҫһыҙ дуҫтан артығыраҡ

Йүнле ҡатын-ҡыҙ биографияһы - ул утыҙ йәшкә тиклем хронологиянан, утыҙҙан һуң мифологиянан тора.

**(Дон-Аминадо).**

Уңышҡа юл ирҙәрен алға табан төрткөләгән ҡатын-ҡыҙҙар менән тулы.

**(Томас Дьюар).**

Йөрәктең һәм аҡылдың бары тик таяуыш биреү хоҡуғы ғына бар. Барыһын да... тән хәл итә.

**(Поль Жеральди).**

Беҙгә дуҫлыҡ һәм изгелек етмәй, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, дуҫлыҡҡа һәм изгелеккә беҙ етмәйбеҙ.

**(Марсель Жуандо).**

Беҙҙең кисәге дошмандар бөгөн шундай матур хәтирәләргә әйләнә.

**(Кароль Ижиковский).**

Әгәр ҙә уҡыусы яҙыусыны белмәй икән, бында уҡыусы түгел, яҙыусы ғәйепле.

**(Илья Ильф).**

Баланың холҡона тәьҫир итеү өсөн иң ҡулай ваҡыт - ул тыуғанға тиклемге йөҙ йыл.

**(Уильям Индж).**

Ерҙә үк үҙ ожмахын төҙөргә маташҡан кешенең тормошонда бынамын тигән тамуҡ барлыҡҡа килеүе лә мөмкин.

**(Поль Клодель).**

Тәнҡитселәр һәр ваҡыт сағыштыра. Ә сағыштырып булмағанды улар күрмәй.

**(Жан Кокто).**

Йәшәү һәм үлем бер-береһенә йәнәш кенә йөрөй, әммә бер-береһе тураһында бер ни ҙә белмәйҙәр.

**(Эмиль Кроткий).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Берәү күршеһенә кәңәш һорап ингән. Әммә күршеһе уны тыңларға ла теләмәгән. "Үҙеңә башҡа кәңәшсе эҙлә, күршем, - тигән ул. - Һиңә шулай яҡшыраҡ булыр, сөнки мин һинең аҫтыртын дошманың, ә дошманлыҡ - насар кәңәшсе. Ана, дуҫтарыңдың береһенә кәңәш ит, улар һиңә яҡшы кәңәш бирер". "Һинең һүҙҙәреңдән мин шуны аңланым, күршем, - тигән кәңәш һораусы. - Һин, ысынлап та, миңә аҫтыртын дошманһың. Әммә был хаҡта һин миңә үҙең әйтәһең икән, тимәк, һин намыҫлы кешеһең. Ә намыҫлы дошман намыҫһыҙ дуҫтан мең тапҡыр артығыраҡ ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21039

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1131